✓ **Кешенең аҡыл туплауға өс юлы бар: уйланыуҙар юлы - быныһы иң изгеһе; башҡаларға оҡшарға тырышыу юлы - быныһы иң еңеле; үҙ тәжрибәң менән яуланған юл - быныһы иң ауыры.**

**(Конфуций).**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20 - 26 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы иреклe

№16 (538)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Үҙенә ҡул һалғандар...**

ауыл зыяратына ҡуйылмаясаҡ

5






**Башҡорт халҡының рухи шаһы...**

Зәйнулла ишан тураһында тағы бер кәлимә һүҙ

7





**Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ,**

Бүтәнсә юҡ сарабыҙ...

8-9





**Шаярыу ғына түгел...**

бала күңеленә гүзәл баһаны ла һендереү был

11





14 **ТВ-программа**


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Шәйхзада Бабич 1917 йылда уҡ "Тупраҡ китһә, һау бул, донъя, өҙөлмәктер самабыҙ", тип яҙғайны, әммә еребеҙгә битарафлыҡ әле булһа дауам итә...

***Мәжит БАЙЕГЕТОВ, Баймаҡ районы Йомаш ауыл хакимиәте башлығы:*** Ергә битарафлыҡ юҡ, тип әйтеп булмай, үкенескә. Беҙҙең халыҡ бит ҡулынан етәкләп йөрөтөүгә күнеккән. Нисә йыл хәҙер шул үҙенең законлы пай ерҙәренә лә хужа була алмайҙар. Документ эштәрен башҡарып, ерҙәрен алыусылар бик һирәк. Шуныһына шөкөр, тием, беҙгә әле ситтән килеп, ер белешеп, һатып алырға самалап йөрөүсе юҡ һәм булмаһын да инде, юғиһә, өлөшөнә төшкән көмөштөң ҡәҙерен белмәүсе, аңламаусылар ҙа бар. Заманында ваучерҙарын һатып, берәү ҙә байып китмәне, ә еребеҙ уның ише генә түгел бит. Беҙ еребеҙҙән башҡа көн күрә, тамаҡ аҫырай алмаясаҡбыҙ. Еребеҙҙән яҙһаҡ, беҙҙең урынға килеп, төпләнеп аласаҡ алпауытҡа ҡол булырға ҡаласаҡ бит! Халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барабыҙ. Бер генә фермер егетебеҙ бар, уға өмөт бағлап торабыҙ инде. Пай ерҙәрен үҙ ҡулына алып, мал аҙығы культуралары, иген сәсеп, ауылға күтәрелеп китергә булышлыҡ итмәҫме, тип. Сөнки әлеге мәлдә колхозыбыҙҙы банкрот тип иғлан итеп, уға тышҡы идарасы ҡуйып, хужалыҡты бөтөрөп, таратып яталар, урындағы власть органдары, үҙегеҙгә мәғлүм, бындай эштәргә ҡыҫыла алмай. Ауыл халҡы, нигеҙҙә, мал көсө менән көн күрә, күптәргә сабынлыҡ кәрәк, шуға ла пай ерҙәрен берләштереп, мал аҙығы культуралары, күп йыллыҡ үлән үҫтереү өсөн файҙаланыу отошло булыр ине, тип уйлайым.


**(Дауамы 2-се биттә).**


### УЙЛЫҒА - УЙ

● ***Совет власы ла юҡҡа сыҡты. Борон-борондан башҡорттоҡо булған, башҡорт йәшәгән ерҙәр хәҙер үҙаллы Ҡаҙағстан ерҙәре булып китте. Бынан бер нисә йыл элек бер Мәскәү ғалимы, батша властарының стратегик фекерләй белмәүе арҡаһында элек башҡорттоҡо булған ерҙәр, хужаларынан тартып алынып, ҡаҙаҡтарға "ваҡытлыса" тип бирелеү арҡаһында Рәсәй күпме еренән ҡолаҡ ҡаҡты. Ул ерҙәр башҡорттоҡо булып ҡалған булһа, хәҙер ул ерҙәр барыбер Рәсәйҙеке булып ҡалыр ине, сөнки башҡорт - Рәсәй халҡы, тип яҙып сыҡты. Шулай итеп, был миҫалда һунн батшаһының аҡыллы, тарихҡа күпкә алға ҡарай белеүен, ә Рәсәй батша властарының үҙ моронокан ары ҡарай алмауын күрәбеҙҙер.***

● ***Беҙ үҙебеҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың ерҙәрен арзанға ғына (бушлай, хатта бер нисә әсмуха сәйгә, тип әйтерлек) һатып бөткәндәренә аптырай инек. Бына шул көндәр яңынан алдыбыҙға килеп баҫты түгелме? Элек сәйгә алданһалар, хәҙер араҡыға алданыу ҡурҡынысы бар. Араҡы менән күҙе-башы томаланған кешегә бер нәмә лә кәрәкмәй. Ул әллә нәмәһен дә һатып ебәрер. Уға милләт яҙмышы ла, балаларының киләсәге лә кәрәкмәй. Ул тик бөгөнгөһө менән генә йәшәй***

● ***Үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғына эйә булған башҡорттар Ленин большевиктары яһаған революциянан һуң ерһеҙ-ниһеҙ тороп ҡала. Быны беҙ яҡшы беләбеҙ. Ерһеҙ ҡалған халыҡ икенсе халыҡтар араһында ирееп юғалыуға дусар ителә. Тарихтан быға бихисап миҫалдар килтерергә мөмкин. Йәһүдтәр - ситкә ҡыуып таратылғандан һуң әллә нисәмә быуат үткәс, юғалтҡан ерҙәрен кире ҡайтарып алып, унда үҙ дәүләтен тергеҙеүгә ирешкән берҙән-бер халыҡ. Был - кешелек тарихында берҙән-бер феномен.***


**(Был фекерҙәрҙе 8-9-сы биттәге монологта уҡығыҙ).**


## ЕР АУАЗЫ

*Төштә түгел, өндә ишетәмен,*
*Ер-Әсәнең үкһеп илауын.*
*Мөлдөрәмә күҙ ҡарашын төбәп,*
*Ялбарыулы ярҙам һорауын.*

*Зифа ҡайын илай, муйыл һыҡтай,*
*Ыңғыраша уҫаҡ, тал, тирәк.*
*Ҡайһы ғына яҡҡа ҡараһам да,*
*Күңел әрней, һыҙлана йөрәк.*

*Әсе күҙ йәштәрен түгә-түгә,*
*Ергә ауҙы мәғрүр ҡарағай.*
*Һуңғы һүҙе булды бахырҡайҙың:*
*"Зинһар өсөн ярҙам ит, Хоҙай".*

*Сылтырап аҡҡан йылғыр шишмәләрҙең*
*Күптән ишетелмәй ағышы,*
*Кемдең генә төшә Ер-Әсәгә,*
*Шундай ауыр, әсе ҡарғышы?*

*Быуат- быуат йәшәп килгән тауҙар,*
*Бер көн килеп шартлай, ишелә.*
*Етеш тормош, ләкин нәфсе көслө,*
*Нимә етмәй һаман кешегә?*

*Ожмах кеүек ғәзиз еребеҙҙе,*
*Әйләндерҙек гүйә тамуҡҡа.*
*Тик бер аҙым ҡалды үҙебеҙгә*
*Инер өсөн "ҡыҙыл" китапҡа.*

*Бар тәбиғәт илай, ғәриплә нгән*
*Ағастарҙан ҡара ҡан тама.*
*Тормош әгәр шулай дауам итһә,*
*Киләсәккә беҙҙән ни ҡала?..*



**Сулпан ЙОМАҒУЖИНА,**
**Белорет районы,**
**"Көньяҡ Урал" дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы белгесе.**

БАШ ЙОРТТА...



# ШӨРӨПТӨ ХӘТЕРЛӘТһӘ ЛӘ...

## күңелгә яҡынырағы шул

**Бөгөн баш ҡалала Өфөнөң брендын эшләп баш ваталар. Летчиктар сленгына инеп киткән һәм хәҙер киң таралыу тапҡан "өс шөрөп ҡалаһы" - "ӨФӨ" логотибын кемдәрҙер хуплай, кемдәрҙер заман талаптарына ярашлы түгел, тип баһалай.**

Әлеге ваҡытта белгестәр донъяла брендингтың иң уңышлы миҫалы тип Нью-Йорҡта туризмды үҫтереү буйынса реклама компанияһы эшләгән I Love NY логотибын иҫәпләй. Өс ҡара хәреф һәм ҡыҙыл йөрәк штаттың танылыуын тәьмин иткән ысын символға әүерелгән.

Амстердамды "I AmSterdam" слоганы буйынса, Мадрид ҡалаһын "¡MADRID!" бренды буйынса танайҙар. Ләкин Рәсәй ҡалалары араһында атап үтелгән ҡалалар кеүек уңыш ҡаҙаныусылар юҡ. Әлбиттә, тырышып ҡарайҙар, әммә Рәсәйҙә, Виктор Черномырдин әйткәнсә: "Яҡшыраҡ булыуын теләгәйнек, һәр ваҡыттағыса килеп сыҡты". Мәҫәлән, күптән түгел Ярославль үҙенең брендын эшләне. Ул уҡтан яҙылған Я хәрефен күҙаллай. Әммә эксперттар был логотипҡа шунда уҡ кире баһа бирҙе. Ә инде Пермдең сүп һауыттарынан алып афишаларға һәм бланкыларға урынлаштырылған ҡыҙыл П хәрефе күптәрҙә үгеҙгә ҡыҙыл сепрәк күрһәткән һөҙөмтә тыуҙыра. Хатта шаярыу ҡатыш: "Элек тә Пермгә барғы ла килмәй ине, хәҙер ҙә барғы килмәй", - тигән фекерҙәр ишетергә тура килә.

Заман үҙе шуны талап итә икән, әлбиттә, баш ҡалаға ла үҙенең брендын булдырыу зарур. Әммә бында ерлектең, халыҡтың, менталитеттың үҙенсәлектәрен дә иҫәпкә алырға кәрәк. Шуға ла белгестәр, әгәр брендты билдәле компаниялар эшләһә, уның хаҡы ла арыу ғына булырға тейешлегенә баҫым яһай. Ләкин хаҡтың ҡиммәтлеге эштең сифатына тура килә икәнлегенә бөрәү ҙә гарантия бирмәй. Эйе, профессионалдар үҙ эшен белеп башҡарыуы мөмкин, тик уға Башҡортостандың, Өфөнөң, ошо ерҙең энергетикаһы һалыныуы ғына бик икеле.

Өстәүенә, белгестәр үҙҙәре үк брендтың маҡсаты ниндәй булыуын төп урынға ҡуя. Сөнки "Башҡортостан" тигәндә күҙ алдына башҡорт балы, башҡорт ҡымыҙы, башҡорт аты һ.б. килеп баҫа. Ә Өфө күҙ алдына йүкәләре, Ағиҙеле, Салауат һәйкәле аша килһә, тиҙҙән уларға тау саңғыһы трассаһы, аквапарк, халыҡ-ара форумдарҙы үткәреү урындарының береһе булыуы ла өҫтәләсәк. Бынан тыш, Өфө тау башында ултырыуы менән дә, унда боронғолоҡ һәм заманса архитектураның үҙ-ара һыйышып йәшәүе менән дә үҙенсәлекле. Һәм ошо үҙенсәлектәре араһынан ул ҡунаҡтарҙың да, туристарҙың да күңелендә нимә менәндер мәңгелеккә урын алырға тейеш. Бөгөн тотош Рәсәйҙә баш ҡаланы "өс шөрөп" - ӨФӨ логотибы буйынса танайҙар һәм беләләр. Бәлки, ошо "шөрөптәрҙән" алыҫ китергә кәрәкмәйҙер? Ни тиһән дә, өс түгел, бер генә шөрөп етмәүе лә үҙен ныҡ һиҙҙереүе мөмкин. Ә әлегә барыһы ла эҙләй...

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Шәйхзада Бабич 1917 йылда уҡ "Тупраҡ китһә, һау бул, донъя, өҙөлмәктер самабыҙ", тип яҙғайны, әммә еребеҙгә битарафлыҡ әле булһа дауам итә...

**(Башы 1-се биттә).**

***Рәдил МӨХӘМӘТЙӘНОВ, БР Президенты ҡарамағындағы Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы профессоры, ауыл хужалығы фәндәре кандидаты:*** Ер менән уны аңлаған, айышын белгән кеше эш итергә тейеш, юғиһә, хатта юғары кимәлдәге рәсми документтар һәм сығыштарҙа ла хаталар киткеләй бит. Мәҫәлән, Рәсәйҙә күпме һөрөнтө ер барлығын да белмәгән бәгзе етәкселәр бар. Ауыл хужалығы министрлығын был мәсьәләнән алыҫ торған кешеләр етәкләй. Мәҫәлән, Елена Скрынник төп һөнәре буйынса врач ине, әле коррупцияла ғәйепләнеп, тикшереү аҫтында. Әлеге министр - юрист. Һәм, ғөмүмән, власть структураларында бөгөн ер мәсьәләһе буйынса белгестәр юҡ тип әйтерлек. Мәҫәлән, ҡайҙа беҙҙең элекке баҫыуҙан ҡайтып инә белмәгән эшсән, фиҙаҡәр агрономдарыбыҙ? Ауыл хужалығы системаһы юҡҡа сығарылыу сәбәпле, агроном хеҙмәте кәрәкмәй булып сыҡты, элек иген дингеҙе сайҡалған баҫыуҙар бөгөн ташландыҡ хәлдә, уларҙы сүп үләне баҫты. "Киске Өфө"нөң был теманы даими иғтибар үҙәгендә тотоуы һәйбәт. Үткән һанда ғына "Диалог" рубрикаһында ер темаһына арналған бик етди һөйләшеү булды, проблема бик дөрөҫ тотоп алынған: ысынлап та, хәҙер ер, тупраҡ уңдырышлылығы буйынса борсолған, шөғөлләнгән кеше бөтөнләй тип әйтерлек юҡ. Еребеҙгә мөнәсәбәт ошо һандарҙан да асыҡ күренә: Урта Европа илдәрендә ерҙең гектарына 325 кг ашлама индерелһә, Ҡытайҙа - 400, Германияла - 670 кг, ә Башҡортостанда был күрһәткес ни бары 11 кг! Ындай шарттарҙа ерҙә эшләп, табыш алыуы мөмкин түгел, әлбиттә, сөнки 22 йыл буйы хәҙер бойҙайға хаҡ бер һумға ла артманы, шул уҡ ваҡытта ягыулыҡ 10-20 тапҡырға ҡиммәтләнде. Элекке агрономдар, шулай итеп, хәҙер ҡайҙарҙа ғына эшләмәй: сауҙала ла, Себерҙә лә, тик ерҙә эшләргә генә уларға мөмкинлек юҡ - колхоз-совхоздар таратылып, таланып бөттө. Ауылдарға сыҡһаң, элекке ферма, эре-эре мал комплекстарының, ремонт базаларының емерелеп бөткән харабалары ғына хужаһыҙлыҡҡа һәйкәл булып ҡыйралып ята. Фермер хужалыҡтары ла нығынып китә алмай, улар юлында ҡырҡ кәртә: техникаһы, ягыулығы, башҡаһы кәрәк. Шунан үҙегеҙ уйлағыҙ: ә ауыл халҡы үҙенең пай ерен нисек эшкәртергә тейеш һуң? Ҡуртымға бирерлек хужалыҡтар ҙа юҡ дәрәжәһендә бит. Шуға күрә был йәһәттән, пайҙарын алмайҙар, тип, бер халыҡты ғына ғәйепләү дөрөҫ булырмы икән? Халыҡҡа ерҙә эшләү мөмкинлектәре булдырылырға, дәүләт ярҙамы күрһәтелергә тейеш. Ҡоро ике ҡул менән генә әллә ни ыратып булмай ул. Скрынник, Сердюков кеүек коррупционерҙар кеҫәһенә ағыла бит халыҡ аҡсаһы - үҙегеҙ күреп тораһығыҙ хәҙер. Белеүемсә, Хәйбулла, Балаҡатай, Асҡын кеүек төпкөл райондарҙа пай ерҙәрен хатта һатып алыусы ла юҡ әле ул. Был, бер яҡтан, һәйбәт, юғиһә, ҡалаға яҡын тораҡ пункттарында фәҡәт үҙ көнөн уйлап, ерен сит килмешәктәргә һатып ебәреүселәр ҙә бар. Шуға күрә, Бабичса әйткәндә, ерен һатҡан - атаһын, әсәһен һатҡан булып сыға инде. Иҫебеҙгә төшөрәйек әле: "Тупраҡ - беҙҙең анабыҙ, беҙ тупраҡҡа балабыҙ. Тупраҡ - беҙҙең атабыҙ, беҙ тупраҡҡа ятабыҙ. Тупраҡ ҡәҙерен аңламау - беҙҙең өлкән хатабыҙ",-тип тә әйткән бит васыят һымаҡ итеп шағир әлеге әҫәрендә.

***Ғиндулла ШӘЙӘХМӘТОВ, Ғафури районы Сәйетбаба ауылының имам-хатибы:*** Әлхәмдулиллаһ, беҙҙең тарафтарҙа ер мәсьәләһендә артыҡ шау-шыу, ығы-зығы күҙәтелмәй. Пай ерҙәре бүлеп бирелгән, хәҙер уны межалау мәсьәләһе тора. Аллаһы ярҙамы менән был изге эш тә имен-аман атҡарылып ҡуйыр, тигән өмөттәбеҙ. Беҙҙә бит артыҡ ер ҙә юҡ, бик самалы ғына, шуға ла ҡәҙерле ул ауылдаштарыма. Буш ятҡан ер ҙә юҡ - мал аҙығы, күп йыллыҡ үлән сәселә ерҙәргә, сөнки халыҡ үҙ алдына мал аҫырап көн күрә. Ерҙе һатыу объектына әйләндереү бер ҙә килешкән эш түгел, был иманыңды һатыуға бәрәбәр. Һатҡан хәлдә лә уны урындағы аҫаба милләттәштәргә, белгән үҙ кешебеҙгә һатырға мөмкин әле ул, әммә ситтән килеп, ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған еребеҙгә хужа булырға, шуның менән туҙға яҙылмаған үҙ законадарын урынлаштырырға ынтылыусы ситяттарға еребеҙҙе бирә күрмәйек! Әлбиттә, ситтән килгән бай иң тәүҙә таҫма телләнеп, яҡшы тормош, эш, аҡса вәғәҙә итер, ләкин бындай ниғмәтте беҙ үҙебеҙ ҙә булдыра алабыҙ бит - беҙ үҙ еребеҙҙә, үҙ илебеҙҙә. Мин уйлайым, беҙгә фәҡәт берҙәмлек, үҙ көсөбөҙгә ышаныс кәрәк. Яҡшы түрә, яҡшы хужанан әҙерҙә көтөп ятыу психологияһынан арынайыҡ инде! Иң мөһиме - беҙҙең аяҡ терәр, арҡа терәр ҡара тупраҡлы уңдырышлы еребеҙ бар, үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күрәйек, ҡолға, меҫкенгә әүерелмәйек.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● Шулай итеп, 2013 йылдың икенсе яртыһына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә **378 һум 36 тингә** яҙылырға була. Апрелдә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● Ә кемдәрҙә бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәрегеҙгә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Хөкүмәтендә "Айыҡ ауыл-2013" республика конкурсына әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса ойоштороу комитеты ултырышы үтте. Бындай бәйге Башҡортостанда икенсе тапҡыр үткәрелә. Конкурсты ойоштороусылар булып БР Хөкүмәте, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һәм "Айыҡ Башҡортостан" тәбәк йәмәғәт хәрәкәте сығыш яһай. Ойоштороу комитетының рәйесе - БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова. 2013 йылда конкурс республиканың резерв фондынан финансланасаҡ, сумма бер миллион һум тәшкил итәсәк.

✓Башҡортостан баш ҡалаһында Рәсәй Федерацияһы субъекттарында бала хоҡуҡтары буйынса вәкилдәрҙең етенсе бөтә Рәсәй съезы булып үтте. Унда РФ Президенты янындағы Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Павел Астахов, Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡатнашты. Форум наградлау тантанаһынан башланды: туғыҙ бала тәрбиәләгән Старцевтар ғаиләһенә - "ГАЗель" микроавтобусынан аҫҡыс, ҡасандыр балалар йортонда тәрбиәләнгән Алена һәм Артем Вәлиевтар ғаиләһенә ике бүлмәле фатирҙан аҫҡыстар тапшырылды. Рөстәм Хәмитов Бала хоҡуҡтары буйынса вәкилгә Башҡортостан Республикаһының Почет грамотаһын тапшырҙы. Павел Астахов, үҙ сиратында, бала хоҡуҡтары буйынса вәкилдәрҙе һәм ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларға ярҙам күрһәткән барлыҡ кешеләрҙе "Балаларҙы яҡлауҙа күрһәткән фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн" миҙалдары, Почет грамоталары һәм рәхмәт хаттары менән наградланы.

✓2005 йылдың 16 апрелендә виртуаль энциклопедияла билдәһеҙ автор башҡорт теләндә "Башҡортостан" исемле тәүге мәҡәлә яҙып ҡалдырған. Хәҙер был көн Башҡорт Википедияһының тыуған көнө тип иҫәпләнә. Һигеҙ йыл дауамында ул үҙенең булмышын иҫбатланы һәм артабан үҫеүен дауам итә. Әлеге ваҡытта Википедияның башҡорт бүлегендә 30 мендән ашыу мәҡәлә иҫәпләнә. Теркәлгән ҡатнашыусылар һаны һигеҙ меңгә еткән, ай һайын 65-тән ашыу ирекмән булған мәҡәләләрҙе тулыландырып, яңыларын яҙып тора.

✓Башҡортостан юлдаш телевидениеһы "Госстрой" компанияһы менән берлектә фатир отторою буйынса сираттағы акция башланы. 12 июнгә тиклем телеканалда акция сиктәрендә төрлө һорауҙар яңғыраясаҡ, һорауҙарға иң күп яуап биреүсе, әлбиттә, енеүсе буласаҡ.

## ЙӨН ӘРНЕҮЕ

**"Киске Өфө" менән беренсе тапҡыр танышыуым бынан туғыҙ-ун йыллап элек булғандыр. Әммә ул ваҡытта үҙем йәш булғанға күрә, йәштәр гәзитенә өҫтөнлөк бирә инем. Ә һеҙҙең гәзиткә әллә ни иғтибар итмәнем. Йылдар үтеү менән үҙемдең яңылышҡанымды аңланым. Былтыр йыл аҙағында "Киске Өфө"нөң бер һаны килеп эләгеү менән ҡарашым үҙгәрҙе, донъямдың аҫты өҫкә әйләнде. Быны ҡайҙа ул байлыҡ! Мәғлүмәти хазина! Эйе-эйе, мин һеҙҙең баҫмағыҙҙы хазина менән тиңләйем. Гәзиттең төрлө мәҡәләләргә бай булыуы, уй-фекерҙәрҙең тос һәм дә тәрән булыуы хайран ҡалдырҙы. Афарин! Рәхмәт һеҙгә! Шулай итеп, йыл башынан һеҙҙең баҫмағыҙға яҙылырға ҡарар иттем.**

# БИТАРАФЛЫҒЫБЫҘ...

## хаттин ашты түгелме?

Артабан күңелемде күптән өйкәп йөрөгән уйҙар тураһында бер-ике кәлимә һүҙ әйткем килә. Мин дә, һеҙҙең кеүек үк, халҡыбыҙҙың киләсәге һәм дә яҙмышы тураһында уйлайым, борсолам. Йәғни, милләт һәм дин мәсьәләләре мине лә борсой. Сетерекле тема, тиерһегеҙ. Эйе, бик ябай түгел. Был төшөнсәләр һәр әҙәми затта иң нескә тойғоларҙың береһен тәшкил итәләр, тип уйлайым. Һәр халыҡҡа - урыҫ булһынмы, ҡумыҡ, инглиз булһынмы - үҙ теле ғәзиз, милләте һәм дине яҡын. Ләкин һуңғы ваҡытта, бәлки, улар элек тә булғандыр, күҙ-колаҡҡа ошо наҙлы хистәр менән уйнаусы әҙәмдәр йышыраҡ салына башланы. Бөтә донъя бәҙрәф диуары булған интернет селтәрендә ултырғандарҙы әйтеп тораһы ла түгел, был кешеләрҙең мәҙәниәт һәм дин юлына нисек килеп сығыуҙары күңелде ҡыра. Тарихи дөрөҫлөктө инҡар итеп, үҙҙәренең "ауырыу" идеологияһын алға этәрә, аңды ағыулай улар. Миҫал кәрәкме? Ҡазан театрҙары репертуарында Зәки Зәйнуллиндың "Арбалы хатыннар" спектакле бар. Ундағы герой оло баҫым яһап, ошондай реплика ташлай тамашасыға: "Мин сезгә сукынған башкорт баласымы әллә?.." Был нимә, пьеса авторының тарихты белмәүеме? Театрҙың художество советы, әртистәре ҡайҙа ҡараған? Әйткән һүҙ - атҡан уҡ, тигәндәй, залда тамаша ҡылған милләттәшебеҙҙең ниндәй уй-тойғолар кисергәнен аңлауы ҡыйын түгел. Әлбиттә, миндә, сукыныу тигәндең башҡортҡа ҡағылмағанын белгән кешелә, был "хәҡикәт" көлкө генә тыуҙыра. Әммә тамаша ҡылыусы йәштәребеҙҙең, ысынлап та, тарих шулай булған икән, тип уйлауы бар бит. Бына хикмәт нимәлә!

Һуңғы арала, милләтебеҙҙең киләсәге дин юлында, тигән ауаздар ишетелә. Эйе, был нигеҙле оран, тип уйлайым. Халҡыбыҙҙың булмышын биләп алған эскелек, наркоманлыҡ һәм башҡа афәттәрҙән ҡотолоу юлы бары тик ислам дине тәғлимәттәрендә ята. Хаҡ дине тотоусы мәмләкәттәрҙең йәшәйеше, көнитмеше быны раҫлай. Ошоларҙы иҫәпкә алып, киләсәгемде үҙгәртеү өсөн, балаларымды дөрөҫ итеп тәрбиәләп үҫтереп, әҙәм итер өсөн ата-бабаларыбыҙ диненә мөрәжәғәт иттем. Иншаллаһ! Уҡырға өйрәнер өсөн кәрәкле китаптар туплай башланым, әммә башҡорт телендә сыҡҡан уҡыу әсбаптарының аҙ булыуы аптырауға һалды. Киң ҡулланылыштағы дини китаптарҙың күбеһе күршеләребеҙҙә, татар телендә нәшер ителгәнлеге асыҡланды. Быныһы - бер. Икенсеһе, мәсеткә вәғәз, хөтбә тыңларға йома намаҙына йөрөй башлағайным, ләкин дүрт-биш тапҡырҙан һуң һүрелдем. Сөнки беҙҙең мәсеттәрҙә бер милләтте башҡаларынан юғарыраҡ ҡуйыу ишараты сағыла. Мәсеткә төрлө милләттәге мосолмандар йөрөй бит, ниңә бер милләттең идеологияһы, дин менән бергә үрелеп, беҙгә тағыла икән? Туғандаш татар халҡына бер дәғүәм дә юҡ. Ләкин диндә милләт айырыу тигән төшөнсә булырға тейеш түгел. Аллаһы Тәғәлә алдында барыбыҙ ҙа тиңбеҙ. Сама белеү, толерантлыҡ нигеҙҙәре бит диндән килә.

Тағы ла әйтер һүҙем шунан ғибәрәт. Беҙ бөтәбеҙ ҙә хоккей ҡарарға әүәҫләндек, республикабыҙҙың спорт флагманы булған "Салауат Юлаев" командаһын барыбыҙ ҙа яратабыҙ, ҡыуанабыҙ һәм дә көйәбеҙ. Милли батырыбыҙ исемен йөрөткән команда бит ул! Мин дә даими рәүештә уйындарҙы ҡарап барырға тырышам. Хоккейсыларыбыҙҙан тыш, камерала ике анимацион ҡурсаҡ та салынып ҡала күҙгә. Ирмәк тә инде үҙәре! Бейеп тә, һикереп тә, йығылып та китәләр. Командабыҙҙы еңеүгә өндәйҙәр, көйәрмәндәрҙең кәйефен күтәрәләр. Әммә... Арҡаларындағы яҙыуҙы уҡығас, күңел тамам ҡырыла, сөнки ул шуҡ шәшкеләрҙең исеме Салауат менән Юлай имеш! Ярай, Салауат тигәне, нисектер, ярайһы кеүек, ләкин Юлай исеме бер сиккә лә һыймай бит. Күҙ алдына танау-ҡолаҡтары ҡырҡылған, һөргөндә ыҙа сиккән кеше - старшина Юлай Аҙналин, Салауаттың атаһы килеп баҫа. Батырҙарыбыҙ рухынан, милли тойғоларыбыҙҙан көлөү тип ҡабул итәм быны. Ниңә уларға ошо исемдәрҙе тағырға? Бәлки, себендән фил әүәләргә маташаһың, тиеүселәр булыр. Әммә, йәмәғәт, быны үҙебеҙҙән үҙебеҙ көлөү тип аңлайым. Манҡорттарҙың, "Вор Салаватушка" тигән кешеләрҙең тирмәненә үҙебеҙ һыу ҡоябыҙ түгелме? Уйланырға һәм дә төҙәтергә урын бар.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйткем килә. Үҙебеҙҙе үҙебеҙ ихтирам итмәһәк, кем беҙҙе хөрмәт итер һуң? Ваҡ-ваҡ өлөшсәләрҙән йыйыла бит ихтирам тигән төшөнсә. Милли үҙаңыбыҙҙы, телебеҙҙе, динебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе юғалтмайыҡ, тиһәк, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының һуңғы йыйыны тезистарын тағы ла бер тапҡыр ҡарап сығып, шуларҙы тормошҡа ашырырға, хәрәкәт итергә кәрәк. Юғиһә, битарафлыҡтан юҡҡа сығыуыбыҙ ихтимал. Кәмәбеҙгә һыу инеп барғанын онотмайыҡ, туғандар!

**Абдрафиҡ СӘФӘРҒӘЛИН.**

---

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# ЯПРАҠТАР ҘА...

## тамырына өҙөлөп төшә

**ҺОРАУ: "Туған телде белмәү - бәхетһеҙлекме?"**

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА, шағирә, журналист:** Көҙ етһә, бейек ағастың иң осондағы япраҡтары ла хатта ағастың тамырына килеп төшә. Тәбиғәттә лә тамырға тартылыу ҡануны ныҡлы һаҡлана. Шуның кеүек, үҙенең тамырҙарын белмәгән кеше ерҙә ҡамғаҡ һымаҡ тәгәрләп йөрөй. Үҙенең туған телен белмәгән кеше -ул ярты кеше. Ата-бабаларыңдың яҙмышын, тарихын, йолаларын, милли ризыҡтарын белмәйенсә, ысын мәғәнәһендә шул милләт вәкиле булып буламы? Был һорауҙы дауам итеп, бер миҫал килтерге килә. Рудольф Нуриевты Башҡортостандан бигерәк сит илдә күберәк беләләр: уны сит илдәрҙә лә, беҙҙә лә ихтирам итәләр. Һәммәбеҙгә лә билдәле - яҡташыбыҙ донъя кимәлендәге талант эйәһе, ул ситтә йәшәгән һәм ижад иткән. Әҙәбиәтебеҙ классигы Мостай Кәримдән: "Нуриевты бәхетле кеше тип уйлайһығыҙмы?" - тип һорағастар, ул: "Юҡ, мин уны бәхетле кеше тип әйтә алмайым, сөнки ул иң ҡәҙерле нәмәһе - тыуған еренән айырылған", - тип яуаплаған. Әҙиптең һүҙҙәре менән килешмәү мөмкин түгел. Туған тел менән дә шул уҡ хәл: иң ҡәҙерлеләрҙән булған туған теленән айырылғандар тулыһынса бәхетле була алмайҙыр ул ысынында.

**Зәки ӘЛИБАЕВ, филология фәндәре кандидаты, доцент:** Үҙен бәхетле итеп хис итеү - һәр кемдең үҙ-үҙен раҫлауына, шулай уҡ бәхетте нисек күҙ алдына килтереүенә лә бәйле, әлбиттә. Мәҫәлән, бер кеше ғаиләһе менән ғүмере буйы йылға буйында көн күрә. Әммә, ни өсөндөр, был кеше йылға һыуын эсеп, унын балығын ашап, үҙ баҡсаһын йылға һыуы менән һуғарып та, үҙе бер тапҡыр ҙа йылғала һыу инеп ҡарамаған. Берҙән-бер көндө, үлем түшәгенә йығылғас, бер үкенесе йәнен өтә: батыуҙан ҡурҡып, исмаһам, ғүмерендә бер тапҡыр ҙа һыуға сумып, йөҙөп ҡарамаған икән ул. Тимәк, үҙен тулы кимәлдә бәхетле итеп тойор өсөн был кешегә бары тик йылғала һыу инеү генә етмәгән. Тормошта бындай миҫалдар бихисап. Һәр кемдең был донъяла үҙ "йылға"һы. Туған телен бар тулылығында өйрәнмәгән, уны көндәлек тормошта ҡулланмаған кешеләрҙе лә әлеге йылғаны инҡар итеп йәшәгән кеше менән сағыштырып инем. Әммә туған теленә битарафтар фажиғәһе әлеге һыуҙан ҡурҡҡан кеше фажиғәһенән дә аяныслыраҡ. Үлем түшәгенә йығылған кешеләр күп осраҡта телдән яҙа. Шулай итеп, ғәмәлдә, тормошта булмаған, әммә булыуы бик ихтимал хәлде артабан үҫтереп ҡарайыҡ: телһеҙ ҡалған ҡарт көс-хәл менән балаларына һуңғы үтенесен яҙыу, ти. Үлем тырнағына эләккәс, унын бары тик бер генә һүҙ яҙырға хәле етте. Әммә ҡағыҙ битенә ҡарт тарафынан көс-хәл менән сыймаҡланған "йылға" тигән һүҙен улы аңлай алманы, атаһының иң аҡтыҡҡы сиктәге берҙән-бер теләген үтәй алмайынса, "Атай, ғәфү ит, ләкин мин һинең теләгеңде аңламаным", тиер бит. Үҙ ваҡытында улына туған телен өйрәтмәгән ата кешенең шул саҡта ниҙәр кисеререн күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел. Был осраҡта, ғүмер буйы үҙен бәхетле итеп тойған кеше ғүмер сәйәхәтенең һуңғы минуттарында үҙен бәхетле итеп тоя алыр инеме икән? Юҡтыр.

Был хәлдә баланың ғәйебе юҡ, бар ғәйеп - ата-әсәлә. Бәхеткә күрә, кешегә фекерләү һәләте бирелгән. Ҙурая килә күптәр ата-әсәләре ебәргән хаталарҙы төҙәтергә ынтыла. Минең дә бала сағында туған телендә аралашыу эләкмәгән дуҫтарым бар, ләкин улар үҙаллы өйрәнеп, бөгөнгө көндә башҡортса һөйләшеп йөрөйҙәр. Әгәр кеше үҙ туған тел йылғаһында рәхәтләнеп йөҙә, унын байлыҡтарын файҙалана икән, тимәк, ул донъяны ла еңелерәк үҙләштерәсәк. Йылғала йөҙөргә өйрәнгән кеше диңгеҙҙә лә юғалып ҡалмай. Туған теле аша ул сит телдәрҙе лә еңелерәк өйрәнә. Әйтәйек, минең өсөн рус теле - барыбер сит тел. Әммә, унын сит тел булыуы минә Толстойҙың әҫәрҙәрен аңларға ҡамасауламай, сөнки мин яҙыусы бөйән иткәндә үҙ телем аша ҡабул итәм, анализлайым. Әгәр мин туған телемдә һөйләшәм, баламды үҙ телемдә иркәләй алам икән, миңә ошонан да ҙурыраҡ бәхет юҡ.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

---

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Силәбе өлкәһендә "Шәжәрә" журналының һәм "Арғужа", "Аҡ тирмә", "Башҡорт74.РФ" гәзиттәренең тәүге һандары донъя күрҙе. Силәбе өлкәһенең Арғаяш районында "Арғужа" гәзите ҡабаттан сығарыла башланы. "Аҡ тирмә" гәзитенең һәм "Шәжәрә" журналының ойоштороусыһы булып Башҡортостан Республикаһының "Аҡ тирмә" төбәк йәмәғәт ойошмаһының Силәбе өлкәһендәге филиалы - "Аҡ тирмә" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте сығыш яһай. Гәзит айына бер тапҡыр сығасаҡ. "Шәжәрә" журналы иһә өлкәлә йәшәгән башҡорттарҙың тарихына һәм шәжәрәләренә бағышланасаҡ. Баҫма кварталға бер сығасаҡ.

✓19 майҙа Халыҡ-ара велосипедсылар көнөнә ҡарата Өфөлә "1000 велосипедсы" көнө үтәсәк. Бындай байрам баш ҡалала өсөнсөгә үткәрелә. Тәүге велоуҙышта 350 кеше ҡатнашһа, бер йылдан һуң уларҙың һаны дүрт тапҡырға тиерлек артты. Быйыл веломарафон Өфө ҡала Советы янынан старт алып, ҡаланың үҙәк урамдары буйлап үтәсәк. Велосипедсылар Конгресс-холдың спорт майҙансығына тиклем юл үтәсәк. Байрамда теләгән һәр кеше ҡатнаша ала.

✓Үткән ял көндәрендә Башҡортостанда ойошторолған тәүге өмәләрҙә ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигондарына 4,6 мең тоннанан ашыу сүп-сар сығарып түгелгән. Территорияларҙы санитар таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса саралар дөйөм алғанда 2,8 мең берәмек махсус техника файҙаланылған. Республикала 13 апрелдә старт алған яҙғы өмәләрҙә 94 мең квадрат метр юл һәм өс мең погон метр тирәһе ҡойма һәм фасад ремонтланған. Иҫәбегеҙгә төшөрәбеҙ, яҙғы өмәләр быйыл төбәктә 18 майға тиклем дауам итәсәк.

✓Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры директоры итеп Ринат Ишмуллин тәғәйенләнде. Ринат Ишмуллин 1964 йылда Баймаҡ районы Фәйзулла ауылында тыуған. 1983 йылда - Сибай педагогия училищеһын, 1993 йылда - Башҡорт дәүләт университетын, 2006 йылда Рәсәй театр сәнғәте академияһын тамамлай. Төрлө йылдарҙа Баймаҡ районы "Урал" колхозының ВЛКСМ комитеты секретары, Баймаҡ тарихи-крайҙы өйрәнеү музейы мөдире, Баймаҡ район Советы башҡарма комитетының йәштәр эштәре буйынса бүлеге мөдире, Баймаҡ ҡалаһының Мәҙәниәт йорто директоры, Сибай дәүләт филармонияһы етәксеһе, Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры директоры вазифаларын башҡарған.

**"Башинформ"дан.**

*✓ - Өфөнөң үҙәгендә урынлашҡас, беҙ донъя кимәлендәге спорт ярыштарын ғына түгел, төрлө сәйәси әһәмиәтле сараларҙан да ситтә ҡала алмайбыҙ. Һәм төрлө кимәлдәге сараларҙы ҡабул итергә әҙербеҙ.*



## ҮӘТ БИТ ӘЙ!

**1990 йылдарҙағы демографик "соҡор" үҙен һиҙҙерә башланы. Белгестәр фекеренсә, нәҡ ошо сәбәп бөгөнгө көндә илдең хеҙмәт баҙарында эшселәр етешмәүенә килтерҙе. Ләкин был, улар билдәләүенсә, әле мәсьәләнең башы ғына, артабан хәлдәр тағы ла ҡырҡыуланасаҡ. Биш йылдан квалификациялы белгестәр генә түгел, ә, ғөмүмән, эшкә яраҡлыларҙың һаны ҡырҡа кәмейәсәк, тип бара улар. Хеҙмәт баҙарындағы көсөргәнешлекте нисек хәл итергә?**

# ХЕҘМӘТ БАҘАРЫНДА...

## йәштәр һәм ҡарттар

Чиновниктар был ауырлыҡтан сығыу юлын эшләргә теләге булған хаҡлы ялдағылар иҫәбенә хәл итеүҙә күрә. Ысынлап та, әгәр ҙә кешенең хаҡлы ялға сыҡҡандан һуң да эшләргә теләге бар икән, ни өсөн уға эш урыны бирмәҫкә? Ләкин был осраҡта, тәү сиратта, хеҙмәт йәшендәгеләрҙең һәм уҡыу йорттары тамамлаған йәш белгестәрҙең мәнфәғәте күҙ унында тотолорға тейешлеген онотмау мөһим.

Хаҡлы ялдағыларға хеҙмәт итеү мөмкинлеге биреүгә эш биреүселәрҙең дә ҡарашы төрлөсә. Кемдер тәжрибәле, эштең рәтен-сиратын яҡшы белгән, донъяһы көйлө, бәләкәй балалары булмаған, тормош мәшәҡәттәренән азат ололарҙы эшкә алыуҙы ыңғай баһалаһа, икенселәр, киреһенсә, хөкүмәттең был ниәтенә ризаһыҙлыҡ белдерә. Улар фекеренсә, оло йәштәгеләр, тәжрибәле булыуҙарына ҡарамаҫтан, замана талаптарына яуап бирерлек түгел. Шулай уҡ эш биреүселәрҙең был фекерҙе яҡлағандары фирманың йәки ойошманың алға китешендә хеҙмәткәрҙәрҙең юғары профессиональ кимәле генә түгел, ә донъяға ҡарашы, етеҙлеге, эште тиҙ башҡарыуы, энергиялы һәм амбициялы булыуы ла мөһим роль уйнай, тип раҫлай. Әлеге ваҡытта был фекерҙәр айырмалығын асыҡ күрергә була. Пенсия йәшендәге йәки ошо йәшкә етеп барыусыларға ла эш урыны табыу еңелдән түгел бөгөн. Шул уҡ ваҡытта йәш белгескә лә лайыҡлы эш урыны табыу ауыр.

Күптән түгел Рәсәйҙең Хеҙмәт министрлығы үҙ вакансияһында йәш буйынса талап ҡуйған эш биреүсегә штраф һалыу тәкдиме менән сығыш яһаны. Рәсәй Хөкүмәте был тәкдимде яҡлап сыҡты һәм хеҙмәт итергә теләге булған һәр кешенең эшләргә хоҡуғы бар, тип белдерҙе. Министрлыҡтың был тәкдиме тормошҡа ашырмы, әллә ҡағыҙҙа ғына ҡалырмы - ваҡыт күрһәтер.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

## БАШ ЙОРТТА

# ӨФӨ ҮҘӘГЕ -

## ул Совет районында




**25 апрелдә баш ҡаланың Совет районы үҙенең 75 йәшлек юбилейын билдәләй. Бөгөнгө йәштәр, бәлки, уның атамаһынан уҡ консерватизм еҫе аңҡыуын күрһә, йәшлектәре, ғүмер юлы ошо район менән бәйле кешеләр өсөн был дата - тарих ҡына түгел, ысынбарлыҡ һәм үҙендең ҡулдарың менән төҙөгән тормош ул. Сөнки беҙҙең күптәребеҙ Советтар Союзында тыуып, СССР-ҙа йәшәүселәр. Ләкин һүҙ ул турала түгел, ә ошо унайҙан Рәшит Ниғмәтизең "Ҡыҙымдың һораүҙарына яуаптар" тигән поэмаһының ҡапыл хәтергә төшөүендә. Ҡыҙы менән халыҡ шағиры бөгөн һөйләшһә, моғайын да, шундай әңгәмә килеп сығыр ине.**

**- Башҡортостандың иң ҙур байлығы - уның күп милләтле халҡы, тиҙәр. Беҙҙең Совет районы ла баймы?**

- Эйе, ҡыҙым. Бөгөн беҙҙең районда төрлө милләттән булған 174,5 мең кеше йәшәй. Өфөнөң ете районы араһында иң күп кеше йәшәгән, халыҡ тығыҙ урынлашҡан урын ул. Бер квадрат километрға 10,8 мең кеше тура килә. Һуңғы йылдарҙа тыуымдың артыуы, үлемдең, киреһенсә, кәмеүе күҙәтелә. Былтыр 2067 бала тыуһа, 1742 кеше вафат булған һәм тәбиғи үсеш 325 кеше тәшкил иткән. Никахҡа инеүселәр күбәйгән, айырылышыуҙар һаны, киреһенсә, әҙәйгән.

Киләсәкте балаларға бәйләп ҡуҙаллаһаҡ, районыбыҙҙа бөгөн 35 мең бала һәм үҫмер иҫәпләнә. Уларҙың 13 мене заманса лицейҙарҙа, гимназияларҙа, мәктәптәрҙә белем ала. Уларҙы тәрбиәләү һәм үҫтереү өсөн барлыҡ шарттар булдырырға тырышыла. Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы балалар баҡсаһында урын менән тәьмин итеү буйынса ла эшмәкәрлек алып барыла. Был йәһәттән 105-се балалар баҡсаһының асылыуы ла мәсьәләне бер ни тиклем кимәлдә хәл итте. Хәҙер инде яңы төҙәлгән бисҭәләрҙә бер ыңғай балалар баҡсалары ла ҡалҡып сығасаҡ.

**- Ул тиклем халыҡты ҡарау өсөн райондың социаль-иҡтисади ҡеүәте лә етди булырға тейештер...**

-Районыбыҙ Башҡортостандың баш ҡалаһының сауҙа-эшлекле үҙәге булып тора. Статистика күрһәтеүенсә, бөгөн бында төрлө формалағы 200-ҙән ашыу эре һәм урта предприятие хужалыҡ эшмәкәрлеге алып бара, шулай уҡ 13 мең самаһы бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекты бар. Былтыр барлыҡ иҡтисад эшмәкәрлеге төрҙәре буйынса предприятиеларҙың тауар әйләнеше 50 миллиард һумдан ашып киткән, был 2011 йыл менән сағыштырғанда 17,9 процентҡа күберәк.

Сәнәғәт етештереүе индексы былтыр 115,4 процент тәшкил иткән. Шул уҡ ваҡытта был һан дөйөм Өфө буйынса 103,6 процент булһа, Башҡортостан буйынса - 105,7 процент.

"Гидравлика", "Магнетрон", "Геоспейс Технолоджис Евразия", "Өфө тепловоздар ремонтлау заводы", "Газ-сервис"тың "Өфөгаз" филиалы, "Башҡортостан" нәшриәте етештереү күләме һәм продукция сығарыу буйынса ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшә. Полиграфия предприятиеларында баҫма продукцияның сифатын күтәреү һәм нәшриәт технологияһын камиллаштырыу маҡсатында яңы ҡорамалдар индерелә.

**- Хәҙер бөтөн ерҙә инвестиция йәлеп итеү юлы менән производство модернизациялана, яңы проекттар тормошҡа ашырыла. Ә Совет районында был йәһәттән эштәр нисек тора?**

- Былтыр райондың иҡтисадын һәм социаль өлкәһен үҫтереүгә төп капиталға 5566 миллион һум инвестиция йәлеп ителгән. Шул сумманың иң ҙур өлөшө биналар һәм ҡорамалдар төҙөүгә (60,4 процент), машиналар, транспорт средстволары һатып алыуға (39,5 процент) йәлеп ителгән.

**- Аҙым һайын тиерлек мега- һәм гипермаркеттар. Ә халыҡтың уларҙың хеҙмәтен ҡулланыу мөмкинлеге нисек һуң?**

- Ҡулланыусылар баҙарында хәл-торош тотороҡло булып ҡала. Һуңғы биш йылда, ысынлап та, ҡулланыусылар баҙары предприятиелары 220 объектҡа артып, 1565 дана тәшкил итте. Ошо осорҙа мега-форматтағы "Семья" сауҙа-күңел асыу комплексы, "Фольксваген", "Тойота" һәм "Лексус" автоүҙәктәре, "Спортмастер", "Суперстрой" гипермаркеттары, "Перекресток" супермаркеты һ.б. сауҙа-сервис комплекстары сафҡа инде. Шулай уҡ районда 30 эконом-класлы универсам эшләй. Шуны ла әйтергә кәрәк, районыбыҙҙа уртаса эш хаҡы былтыр 28740 һумға етеп, дөйөм баш ҡала күрһәткесенән юғарыраҡ булды.

**- Халыҡҡа хеҙмәт күрһәтеү объекттарының күплеге һәм һәр кемдең һайлау мөмкинлеге булыуы яҡшы, әммә тамаҡ туйҙырып, күңел асып ҡына ла йәшәп булмай, кешеләрҙең үҙ ҡыйығы мәсьәләһе нисек хәл ителә?**

- Һуңғы биш йыллыҡта Совет районында 200 мең квадрат метр күп фатирлы торлаҡ файҙаланыуға тапшырылды. Халыҡтың йәшәү шарттарын яҡшыртыу райондың инфраструктураһын үҫтереү менән бер рәттән өҫтөнлөклө булып тора. Бында район предприятиелары һәм ойошмаларының үҙ көстәре менән хеҙмәткәрҙәренә торлаҡ төҙөүен билдәләп китергә кәрәк. Былтыр улар 6,2 миллиард һумлыҡ эш башҡарҙы. Шулай уҡ халыҡтың ял итеү урындарын төҙөкләндереү буйынса ла эш алып барыла. Былтыр Михаил Нестеров исемендәге сквер яңы һулыш алһа, әле И. Якутов исемендәге парҡты реконструкциялау эштәре бара. Тиҙҙән уның эргәһендәге иҫке йорттар урынында яңы торлаҡ комплексы ҡалҡып сығасаҡ. Үҙәк баҙар янында "Айгөл" бисҭәһе төҙәлә. Шулай уҡ адреслы программаға ярашлы, торлаҡ йорттарға капиталь ремонт яһала. 2008 йылдан 2012 йылға тиклем районда 81 йортҡа комплекслы капиталь ремонт үткәрелде, 55 йортта 128 лифт алмаштырылды.

**- Былтыр Өфөлә Рәсәй һәм донъя кимәлендә уҙған спорт саралары Совет районында башланып, бында уҡ тамамланды. Тимәк, Совет районы - баш ҡаланың йөрәге, тиергә лә мөмкин?**

- Өфөнөң үҙәгендә урынлашҡас, беҙ донъя кимәлендәге спорт ярыштарын ғына түгел, төрлө сәйәси әһәмиәтле сараларҙан да ситтә ҡала алмайбыҙ. Һәм төрлө кимәлдәге сараларҙы ҡабул итергә әҙербеҙ һәм беҙ быны өсөн ҡеүәт тә етерлек. Мәҫәлән, уҙған йылдарҙа төҙөлгән "Өфө-Арена" универсаль спорт аренаһы хоккей, фигуралы шыуыу буйынса ярыштар үткәреүгә, волейбол, гандбол, баскетбол буйынса күнекмәләр уҙғарыуға яраҡлаштырылған. Алда торған ҙур сәйәси сараға - ШОС һәм БРИКС саммиттарына ҡунаҡтар ҡабул итеүгә әҙерләнеп, донъя кимәлендәге дүрт ҡунаҡхана төҙөү планлаштырыла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҙенең 75 йәшлек юбилейын ҡаршылаған райондың, әлбиттә, ҡаҙаныштары бихисап. Уларҙы гәзит биттәрендә генә барлап бөтөү ҙә мөмкин түгел. Әммә шуныһы хаҡ: 75 йыл кеше ғүмере менән иҫәпләгәндә - аҡһаҡалдар йәше. Ә аҡһаҡалдарҙың йәштәргә әйтер һүҙе лә, етерлек туплаған тормош тәжрибәһе лә, бүлешерлек аҡылы ла, бирерлек һабағы ла бар. Был хаҡта һөйләп тороу ҙа әрәкмәй, сөнки күңел күҙе булған кеше - күрә, ишетергә теләгәндәр ыңғай үҙгәрештәр тураһындағы яңылыҡтарҙы ишетә. Ә инде йөрәгендә ватансылыҡ тойғоһо булғандар үҙенең тыуған ерен, торған ерен ихлас ярата. Сөнки Ватан - ул, ысынлап та, тыуған, беҙ йәшәгән, эшләгән урын, аяҡ тереп баҫып торған ер, беҙ күкрәк тултырып һулыш алған һауа, ҡыҫҡаһы, әлеге ваҡытта беҙ торған урын!**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓23 апрелдә Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтенең "Башҡорт китабы йорто" магазинында (Октябрь проспекты, 2) Бөтә донъя китап һәм авторлыҡ хоҡуғын яҡлау көнө унайһынан "Автограф көнө" уҙғарыла. Китап һөйөүселәргә нәшриәттә балалар өсөн сыҡҡан ҡайһы бер баҫмаларҙың авторҙары менән яҡындан танышыу, автограф алыу мөмкинлеге бар. Сарала билдәле балалар яҙыусыһы Факиһа Туғыҙбаева, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Гүзәл Хамматова, Рәшиҙә Бик, Әлфиә Әсәҙуллина ҡатнашасаҡ. Башлана 12-00 сәғәттә.

✓25-28 апрелдә Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте республиканың Баймаҡ, Бөрйән райондарында китап продукцияһы күргәҙмә-йәрминкәһе ойоштора. Китап сауҙаһы 25 апрелдә иртәнге 10-дан 18 сәғәткә тиклем "Иҫке Собханғол баҙары"нда, 26 апрелдә район мәҙәниәт һарайы фойеһында, 27 апрелдә "Баймак" сауҙа-сервис комплексында, 28 апрелдә Баймаҡ ҡалаһының үҙәк баҙарында ойошторола.

✓Журналистика өлкәһендәге "Медиапрофи" республика премияһы сиктәрендә Өфө хакимиәте "Алтын шөрөп" исемле махсус награда булдырҙы, тип хәбәр иттеләр мэрияның матбуғат хеҙмәтенән. "Алтын шөрөп" Өфө һәм өфөләләр, ҡаланың проблемалары һәм уларҙы хәл итеү юлдары, баш ҡаланың үткәне һәм уны үҫтереү мөмкинлектәре тураһындағы иң ҡыҙыҡлы, бәхәсле, үткер материал өсөн тапшырыласаҡ. 2013 йылғы "Медиапрофи" премияһы "Хеҙмәт кешеһе" темаһына арнала.

✓Рәсәйҙә сираттағы хәрби хеҙмәткә яҙғы саҡырыу кампанияһы старт алды. 1 апрелдән 15 июлгә тиклем Ҡораллы Көстәр сафын 153,2 мең егет тулыландырасаҡ. Башҡортостандан хәрби бурысын үтәргә 5500 егет оҙатыласаҡ, тип хәбәр иттеләр республиканың хәрби комиссариатынан. Хәрби хеҙмәткә көҙгө саҡырыу йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Үҙәк хәрби округында иң яҡшыһы тип танылды. Илдә хәрби хеҙмәткә саҡырыу буйынса план 2011 йылдың яҙынан ҡыҫҡартылды.

✓Башҡортостан прокуратураһына яңы етәксе тәғәйенләнде. Ҡоролтай депутаттары Андрей Назаров кандидатураһын бер тауыштан хупланы. Әлегә тиклем ул Дағстан прокуратураһын етәкләгән.

АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!

**Урындағы үҙидаралыҡ органдары эшмәкәрлеген әүҙемләштереү һәм ауыл халҡын дәртләндереү, уларҙы биләмә тормошонда ҡатнашыуға йәлеп итеү, сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау һәм йәш быуынға айыҡ тәрбиә биреү маҡсатында Белорет районының муниципаль берәмектәренә лә "Айыҡ ауыл" республика конкурсында ҡатнашырға саҡырыу ташланды. Саҡырыуға беренселәрҙән булып Абҙаҡ һәм Рысыҡай ауылдары ҡушылды.**

# ҮҘЕНӘ ҠУЛ ҺАЛҒАНДАР...

## ауыл зыяратына ҡуйылмаясаҡ

Әлеге ваҡытта ике ауылда ла был йүнәлеш буйынса етди эштәр башланды. Абҙаҡта конкурста ҡатнашыу буйынса ауыл активы менән кәңәшмә уҙғарылып, ойоштороу комитеты раҫланды, тәҡдимдәр, кәңәштәр тикшерелде һәм эскелектән миктәгән ғаиләләр менән эшләү өсөн айырым кешеләр тәғәйенләнде,

Рысыҡайҙар иһә, халыҡты айыҡ тормошҡа йәлеп итеү тәү ҡарамаҡҡа бәләкәй генә күренгән проблемаларҙы хәл итеүҙән башланырға тейеш, тип иҫәпләй һәм нәҡ ошо йүнәлештә эш башлаған. Ауылда сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалаусы айырым дружина булдырылған. Дружина ағзалары итеп ауылдаштары алдында хөрмәт ҡаҙанған, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашҡан ете кеше һайланған. Улар иңенә ҡырын эштәр, алама ғәҙәттәр менән булған кешеләрҙе контролгә алыу һәм бөтөрөү, ауылдаштары менән уртаҡ тел табып эшләү бурысы йөкмәтелгән. Ауыл имамы Рушан Латипов халыҡ менән осрашыуҙар үткәреп, хилаф эштәрҙең зарары тураһында вәғәз һөйләй. Был йәһәттән һиҙелерлек үҙгәрештәр бар тип әйтергә була. Мәсеткә йөрөүселәр, намаҙға баҫыусылар һаны артҡан.

Әлеге ваҡытта ауылда эшләп килгән 4 магазин кәштәләренән дә спиртлы эсемлектәр һатыуҙан алынған. Өйҙән араҡы һатыусылар менән айырым эш алып барыла. Бындай "эшҡыуарҙарҙы" тотторо-усыларға бер мең һум премия, ә закон боҙоусыларға өс мең һум штраф ҡаралған. Бөгөн премия алыусылар ҙа, штраф түләүселәр ҙә бар. Шуныһы ҡыуаныслы, ауыл эшҡыуарҙары яңы башланғысты хуплап күтәреп алған һәм үҙ теләктәре менән араҡы, һыра һатыуҙан баш тартҡан.

-"Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашырға саҡырыу ауылдаштарҙың күбеһендә хуплау тапты һәм уның ыңғай һөҙөмтәләре күренә башланы ла инде. Ауылдың матур киләсәге үҙебеҙҙең ҡулда икәнен халыҡ яҡшы аңлай, ойошторған сараларға ихлас ҡушыла, - ти ауыл хакимиәте башлығы Айгиз Мусин.

Мәҙәниәт йортоноң эше лә яйға һалынған. Хәҙер һәүәҫкәр артистар аҙна һайын күрше-тирә ауылдарға концерт менән сыға, концерт алдынан халыҡҡа айыҡ тормош, сәләмәт йәшәү рәүеше хаҡында лекция уҡыла. Йәштәрҙең буш ваҡытын, киске ялын күңелле һәм файҙалы итеп үткәреү буйынса айырым саралар үткәрелә. Рысыҡай ауылы клубына бильярд өҫтәле алып ултыртылған, Сосновка мәктәбенең спорт залы тренажерҙар менән йыһазландырылған, каратэ, волейбол секциялары эшләй башлаған. Яҡын араларҙа милли көрәш буйынса түңәрәк асыласаҡ. Теләүселәрҙе райондың билдәле көрәшсеһе Айҙар Махиянов көрәш серҙәренә өйрәтәсәк. Сосновка хакимиәтенә ҡараған ауылдар халҡына тағы ла бер ҡыуаныслы хәбәр бар, хәҙер ай һайын баш ҡала артистары уларҙы үҙҙәренең концерты менән һөйөндөрөп торасаҡ.

Тормош булғас, әҙәм балаһын тыуымы ла, үлеме лә берҙәй һөйөндөрөп һәм көйөндөрөп тора. Үҙ ирке менән яҡты донъянан китеүселәрҙең һанын туҡтатыу өсөн ауыл халҡы берҙәм рәүештә һуңғы сараға барырға мәжбүр булған. Был яғына, сход ҡарары менән, үҙ ғүмерен үҙе ҡыйыусыларҙы ауыл зыяратына ҡуйырға рөхсәт булмаясаҡ, сөнки һуңғы йылдарҙа ғына ла Сосновка хакимиәте биләмәһендә бер нисә суицид осрағы теркәлгән. Яңы башланғыс, үҙ теләге менән ваҡытынан алда донъя менән хушлашырға теләүселәрҙе аҡылына килтерер, тиғән ышаныс тыуҙыра.

Ауылдарҙа эш юҡ, тип зарланыусылар, оҙон аҡса эҙләп ситкә сығып китеүселәр күп булһа ла, күп ерҙәрҙә көтөүсе мәсьәләһенең көнүҙәк проблемаларҙың береһе булыуы берәүгә лә сер түгел. Әллә яуаплылығынан, әллә ауырлығынан ҡурҡып, был эшкә риза булыусылар юҡ тиергә була. Быйыл рысыҡайҙар был мәсьәләне лә яйға һалыуға өлгәшкән һәм ауыл көтөүсеһен һайлау буйынса яңы алым уйлап тапҡан. Хәҙер көтөү алырға теләүсегә килешеү буйынса 50 кубометр ағас бүленәсәк. Вәғәҙә ителгән ағас көтөү осоро тамамланғас та биреләсәк.

Күптән түгел Рысыҡай ауылы халҡы шатлыҡлы ваҡиға ла кисергәйне. Ауыл хакимиәттәренә квартал һайын бүленгән аҡсаға үҙ бюджеттары аҡсаһын да ҡушып, урамдарға яҡтыртыу лампалары ҡуйылды. Лампалар автоматлаштырылған режимда эшләй. Әлеге ваҡытта ҡалған ике урамға ла яҡтыртҡыстар ҡуйыуға документтар әҙерләнә. Яҡын арала шулай уҡ иң киҫкен һыу мәсьәләһе хәл ителәсәк. Ауылда 30 метр самаһы оҙонлоғондағы һыу торбалары алыштырыласаҡ. Көндәр йылыныу менән ауылда төҙөкләндереү эштәре киң йәйелдереләсәк. Ауырыраҡ хәлдә йәшәүселәргә бағыусылар аҡсаһынан буяу, штакетник кеүек төҙөлөш материалдары биреләсәк. Йәйгә тиклем башҡараһы, төҙөкләндереһе эштәре күп әле рысыҡайҙарҙың. Ә инде ҡайһы бер эштәрҙең осона сыҡҡас, ауылда мосолман һабантуйы үткәреү планлаштырылған. Әлеге ваҡытта был байрамды үткәреү өсөн ауыл имамы баш ҡаланан рөхсәт юллай. Муниципаль район хакимиәте, урындағы ҡоролтай иһә үҙ йәһәтенән ярҙам күрһәтергә әҙер булыуын белдергән.

Ниәт иткән - мораҙына еткән, тиҙәр. Рысыҡайҙарҙың да ниәт иткән маҡсаттары уңышлы тамамланыр, уларҙың башланғыстары башҡаларға ла өлгө булып торор, тип ышанғы килә.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

ҺОРАУ - ЯУАП

# ҺАЛЫМ ХӘЛЕ НИСЕК?

**Ижади һәм журналист конкурстарында еңгән өсөн бүләк һәм призлар иҫәбенә һалынған һалым тураһында енткеләберәк аңлатһағыҙ ине.**

- Һалым кодексының 217-се статьяһындағы 28-се пунктҡа ярашлы, хаҡы 4 мең һумдан артмаған бүләк һәм аҡсалата призларға һалым һалынмай. Суммаһы 4 мең һумдан артҡан осраҡта, Кодекстың 210-сы һәм 224-се статьяларына ярашлы, артыҡ сумма килем тип һанала һәм 13 процент ставка менән һалым һалына. Физик шәхес бүләк алған ойошма был ындай осраҡта һалым агенты тип билдәләнә һәм аҡсалата тапшырылған бүләктән 13 процент күләмдә һалым алып ҡалырға бурыслы. Әгәр ҙә приз йәки бүләк ниндәйҙер әйбер булараҡ тапшырылһа, Кодекстың 226-сы статьяһының 5-се пунктына ярашлы, һалым агенты һалым түләүсегә һәм һалым органдарына түләнергә тейешле һалым суммаһы хаҡында белдереү ҡағыҙы ебәрергә бурыслы. Әйберләтә алған һәм хаҡы 4 мең һумдан артҡан бүләк өсөн физик шәхес һалым декларацияһы тултырырға һәм тейешле һалымды түләргә бурыслы. Физик шәхес үҙ бурысынан ситләшкән осраҡта, түләнмәгән һалым суммаһының 5 проценты күләмендә штраф һалына. Ләкин был штраф күрһәтелгән сумманың 30 процентынан артмаҫҡа тейеш.

**Мин фотоаппарат отҡайным. Уның өсөн һалым түләргә тейешменме? Һалым түләү өсөн квитанцияны ҡасанырaҡ көтөргә?**

РФ Һалым кодексының 228-се һәм 229-сы статьяларына ярашлы, лотерея, тотализатор йәки башҡа төрлө уйындар ойоштороусылар тарафынан түләнгән аҡсалата призлар йәки әйберләтә бүләктәр отҡан осраҡта, физик шәхестең йәшәү урыны буйынса һалым органына декларация биреү һәм ошо декларация нигеҙендә иҫәпләп сығарылған һалымды түләү бурысы барлыҡҡа килә (отош суммаһының 13 проценты). Аҡсалата приз йәки әйберләтә бүләк хаҡында декларация бүләк отҡан йыл артынан килеүсе йылдың 30 апреленә тиклем бирелергә, ә һалым 15 июлдән дә ҡалмай түләнергә тейеш.

**Минең ҡыҙым 2008-2012 йылдарҙа түләүле белем алды. Уҡыу өсөн түләнгән аҡсаның һалым айырмаһын кире ҡайтара аламмы? Уҡыу йорто менән килешеү минең исемгә төҙөлгән.**

- Дөйөм белем биреү учреждениеларының көндәҙгә бүлегендә түләүле белем алыусы һәр бала өсөн ата-әсә социаль һалым аҡсаһын кире ҡайтарырға хоҡуҡлы. Ләкин кире ҡайтарылған һалым аҡсаһы һәр бер бала өсөн 50 мең һумдан артмай. Һалым ҡайтарыу йәшәү урыны буйынса һалым органы тарафынан №3-НДФЛ формаһы декларацияһы нигеҙендә ҡайтарыла. Шулай уҡ һалымды ҡайтарыу өсөн ата-әсәнең ҡулында уның исеменә уҡыу йорто менән төҙөлгән килешеү күсермәһе һәм түләү хаҡындағы квитанцияларҙың булыуы мотлаҡ.

**БР буйынса Федераль Һалым инспекцияһы әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



### Тотлоғоп һөйләшеү

❖ Баҙыян (руссаһы ясенец белый - күп йыллыҡ үлән) сәскәһе һәм япраҡтарына 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға, 15-20 минут төнәтергә. Һөҙөлгән йылымыс төнәтмә менән ауыҙҙы һәм тамаҡты 3-5 минут сайҡатырға, йотмаҫҡа. Көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатларға.

❖ 3 тамсы баҙыян һутын 2 тамсы баҡса кесерткәне (крапива жгущая) менән ҡушып, телгә һалырға, 5 минут тоторға, йотмаҫҡа. Ике сәғәт һайын көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатларға. Дауаланыу курсы - 10 көн.

❖ 100-әр грамм ҡыр кесерткәне (крапива двудомная) һәм аҡ сәскә таждары, 50-шәр грамм айыу ҡурайы (дягиль) тамыры, ҡомалаҡ тубырсыҡтары, мелисса япраҡтары, арса (вереск) һәм һары мәтрүшкә үләндәрен ҡушып болғатырға. 1 балғалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 20-30 минут төнәтергә. Көнөнә ике тапҡыр - иртән һәм йоҡлар алдынан яртышар стакан эсергә.

❖ Ҡолаҡтарҙы баҫып, йыларға. Китапты көйләп уҡырға, ни тиклем ҡысҡырып уҡыйһағыҙ, шул тиклем яҡшыраҡ. Ышанығыҙ, тотлоғоуҙы еңеп була, һеҙ иркен, яҡшы итеп һөйләшә башлаясаҡһығыҙ.

### Танауығыҙ тонһа...

❖ Ярты стакан йылы һыуға ярты балғалаҡ сода һалып болғатығыҙ. Устарға ҡойоп, танау менән эскә тартырға, ярты минутка танауҙы бармаҡтар менән тотоп торорға, һуңынан һыуҙы сығарығыҙ. Был дауаны, ғәҙәттә, иртәле-кисле ҡулланалар. Танау тоноуҙың төп сәбәбе булып һалҡын тейҙереү тора, шуға был рецепт менән бер рәттән иммунитетты нығытыусы медикаменттар ҡулланығыҙ, үләндәр эсегеҙ.

### Йәшел сәй

❖ Борондан йәшел сәйҙе дизентерия, ҡорһаҡ тифынан дауаланыу өсөн ҡулланғандар. Ҡаты итеп бешерелгән йәшел сәй ашҡаҙан-эсәк трактына, баш мейеһенә ҡан һауғанда ярҙам иткән. Йәшел сәй һейҙек һыуығына, бөйөргә, бауырға таш ултырыуҙан һаҡлай. Тиреңең функцияларын әүҙемләштерә, тир бүленеп сығыуҙы яҡшырта, күҙәнәктәрҙе таҙарта. Әммә йәшел сәй организмдан бөйөр аша шыйыҡлыҡ бүленеп сығыуына тотҡарлыҡ яһағанын белеп ҡуйығыҙ.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Бала табыуға бәйле им-том

**Нәнәй мунсаһы.** Нәнәй мунсаһына беренсе булып ҡартинәйҙәр, ҡартатайҙар керә. Уларҙың йәшен бирһен, уларға оҡшаған ғүмерле бала булһын, тип башҡаралар икән был йоланы. Нәнәй мунсаһына туғандарын да, күршеләрен дә саҡыралар. Бала миндеген Урта Урал башҡорттары "нәнәй япраҡ" тиҙәр.

**Нәнәй япраҡ.** Яңы тыуған баланы сабыу өсөн "нәнәй япраҡ" әҙерләнә. Элек "нәнәй япрағы" ваҡ япраҡтан бәйләнгән. Шуның менән, тәне ныҡ булһын, тип сапҡандар баланы. Ғәҙәттә, баланы кендек әбейе сапҡан.

"Нәнәй япраҡ" бәләкәй генә, йомшаҡ ҡына була.

**Баланы мунса индереү.** Ҡайһы бер яҡтарҙа, кендек инәһе ҡырҡ көн буйына мунса яғып, баланы мунса индерә. Унда ул баланы бәләкәй генә миндек менән саба, һылай. Мунса индергәндә кендек инәһе төрлө һамаҡтар менән баланың киләсәгенә программа һала. Мәҫәлән:

*Һап-һап-һап!*
*Мунса ташы, бүрәнә башы,*
*Әбейҙе әбей тип әйт,*
*Бабайҙы бабай тип әйт!*
*Айыу балаһы,*
*Бүре балаһы,*
*Татлы таба бул,*
*Алабуға бул,*
*Һыуҙан таҙа бул,*
*Һөләктәй бала бул,*
*Минең ҡулым түгел,*
*Ғәйшә, Фатима ҡулы -*
*Һап-һап-һап!*

Бик үҙенсәлекле материал Урта Урал башҡорттарынан яҙып алынды.

Кендек әбей уланды мунса индергәндә төнлөктө аса ла ошолай һамаҡлап саба: "Минең сабыйым илаҡ түгел, илаҡ түгел. Сабыйымдың сирҙәре сығып осһон, бәхетһеҙлектәре сығып осһон, ҡара ҡоштар алып китһен, ҡарғалар алып китһен, амин, амин". Шунан мунса матсаһына япраҡтың төбө менән төртөп ала. Аҙаҡ ул япраҡ менән баланың башынан аяғына ҡәҙәр һыпыра һәм төнлөктән һыу ҙа һибә торғайны.

Кендек әбей баланы ҡырҡ көн буйына саба ине. Ул баланың тәненән тирен һурып алып, ошолай һамаҡлап:

*Таш сабам, таш сабам,*
*Таш кеүек ныҡ бул,*
*Ләүкә кеүек оҙон бул.*
*Мунса ташы, бүрәнә башы!*
*Ҡабағанға ҡаптырма,*
*Тибәгәнгә типтермә.*
*Сиреҥ-сөрөң барыһы ла ошонда ҡалһын",*
- тип мунса ташына төкөрөп ҡуя ине.

Ошо әпсенде әйтеп тә сабалар:

*Айыу балаһын сабам,*
*Бүре балаһын сабам,*
*Айыу кеүек аға бул,*
*Бүре кеүек боға бул,*
*Ҡуян кеүек йүгерек бул.*
*Тәмле-татлы телле бул,*
*Ата-инәңә шәфҡәтле бул.*
*Әбейҙе күрһәң, әбей, тип әйт,*
*Бабайҙы күрһәң, бабай, тип әйт.*
*Бәхетле, ырыҫлы бул,*
*Ғүмерле, тәүфиҡлы бул!*

Бала сапҡан япраҡты "нәнәй япраҡ", тип, төнлөктән ташлайҙар. Аҙаҡ "Бисмилла" әйтеп, уны мунса мейесенә индереп яҡҡандар.

Кендек әбейе: "Ағиҙелдең аръяғынан имсе әбей килгән", - тип тә саба.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

ҺАБАҠТАР

# ТЕЛЕ БЫСРАҠТЫҢ...

## күңеле таҙа була аламы?



**Туҡталышта ике ханымдың үҙ-ара һөйләшеүе ҡолаҡҡа салынды. Быйылғы Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тураһында фекер алыша ине улар.**

"Бөтә эштәре шул ағас ултыртыуға ҡайтып ҡалыр инде", - тине ҡатындарҙың береһе быйыл үткәреләсәк сараларға ишаралап. Шунан ул урман, ағастың экологияға йоғонтоһо, кеше һаулығына тәьҫире тураһында белгәндәрен һөйләй башланы. Имеш, имәнде ҡосаҡлап торһаң, кире энергияны, арығанлыҡты үҙенә ала, ҡайын ҡан баҫымын көйләй. Миләш, балан ағастарының файҙаһы тураһында ла һөйләп өлгөрҙө был. Ә үҙенең теле, кем әйтмешләй, ҡырҡып эткә бирһәң, эт тә ашамаҫ: әшәке итеп һүгенә, үҙе бер туҡтауһыҙ төкөрөнә. Сәйнәп, ауыҙы талып киттеме, әле генә таҙалыҡ тураһында вәсүәсә һатҡан ҡупшы ҡатын, янында ғына сүп һауыты ултырыуға ҡарамаҫтан, һағыҙын сырт-латып аяҡ аҫтына төкөрҙө. Бына һиңә тәбиғәттең, тирә-яҡ мөхиттең сафлығы өсөн көрәшеүсе!

Үҙенән башҡа бер кемде лә яратмаған, хөрмәт итмәгән, йәмғиәт нормаларын һанға һуҡмаған, үтәмәгән кешеләр аҙым һайын осрап тора шул. Ҡайһы берҙә уларға иғтибар ҙа итмәйбеҙ: һүгенәме - әйҙә, һүгенһен, төкөрөнәме-ҡаҡырынамы - әйҙә, теләһә ни эшләһен, тибеҙ. Ә был ҡатынға иғтибар итмәй булмай ине шул. Иң тәүҙә тәбиғи сибәрлеге менән иғтибарҙы йәлеп итте ул. Тештәре ынйы кеүек тип-тигеҙ, ап-аҡ. Затлы кейеме һомғол кәүҙәһенә килешле ятып тора. Һоҡланып ҡына ҡарап торорлоҡ. Әммә ҡыланышы, теләһә ни һөйләгән теле...

Кешенең тәне лә, күңеле лә, ғәмәле лә, намыҫы ла пак булырға тейеш, тип өйрәтә динебеҙ. Паклыҡ, таҙалыҡ - диндең айырылғыһыҙ өлөшө. Тағы ла кешенең даими таҙартып торорға тейешле ағзаларының береһе - тел. Быны тура һәм күсмә мәғәнәлә аңларға була. Теште яҡшылап йыуып та, телде таҙартмаһаң, ауыҙ эсе тулыһынса таҙармағанын һәр кем тоялыр. Философия фәндәре докторы Самат Мөхәмәтйәновтың "Киске Өфө" гәзитендәге "Ун алты йәшлек ҡартлас" мәҡәләһендә телде таҙартыуҙың ниндәй ыңғай һөҙөмтәләргә килтереүе бәйән ителә. "Мин оло ҡыуаныс менән үҙемдең яңы, ҡабаттан тыуған телем менән идара итәм. Ул бәләкәй генә, ҡыҙыл-алһыу һәм шул тиклем тыңлаусан. Элек ҡуйы һәм тәмһеҙ булған төкөрөк икенсегә әйләнде", - ти ул. Быныһы - бер.Телде йәнә һүгенеү, әр, ғәйбәт һүҙҙәренән таҙартыу мөһим. Һөйләгән һүҙең ни тиклем матур, йылы булһа, йөҙөң дә шул тиклем нурлыраҡ, һөйкөмлөрәк, яҡтыраҡ була бит.

Ҡайһы берәүҙәрҙән "Мин тура һүҙле, кем булыуына ҡарамаҫтан, тураһын бәрәм дә әйтәм", тигәнде ишеткән бар, әммә халыҡ аҡылы "Тураһын әйткән туғанына ярамаған", ти. Үҙебеҙгә оҡшамағанды, килешмәгәнде, ризалашмағанды туранан-тура түгел, бәлки, кинәйәләп, йомшағыраҡ әйтһәң, отошлораҡтыр, әммә ҡайһы берҙә әлеге лә баяғы телгә хужа булып булмай, асыуға, рәнйеүгә, ҡаты бәғерлелеккә юл ҡуябыҙ. Тап шул ҡаты телебеҙ арҡаһында үҙебеҙҙе уратып алған кешеләр менән үҙ-ара аңлашыуҙы, яҡшы мөнәсәбәтте юҡҡа сығарабыҙ.

Тирә-яҡ мөхиттәге башҡа тереклектән беҙ, кешеләр, тап шул телебеҙ менән айырылабыҙ. Тәбиғәттә башҡа бер йән эйәһе лә беҙҙең кеүек тел аша аралаша алмай, шулай булыуға ҡарамаҫтан, ундағы бөтә нәмә үҙ-ара килешеп, аңлашып, тулы гармонияла йәшәй. Миҫалға миҙгелдәр алмашыныуын ғына алайыҡ. Ҡышҡы селләнән һуң эҫе йәй еткәнен бер кемдең дә күргәне юҡтыр. Тәбиғәт ҡануны буйынса, ҡыштан һуң яҙ килә, көн ҡапыл түгел, яйлап йылына. Шулай ер шарындағы бөтә тереклек йәйгә эҫегә яйлап әҙерләнә. Ҡар һыуҙары ҡушылмаһа, йылға ла ташмай. Тел аша аралашмаһалар ҙа, тәбиғәттәге бөтә тере зат бер-береһе менән килешеп, аңлашып, аһәңдәш булып йәшәй. Ә кешеләр тап шул тел арҡаһында тәбиғәттәге, кешеләр араһындағы гармонияны юҡҡа сығара.

...Матурлыҡ алиһәһе булырлыҡ әлеге ханымдың һүгенә-һүгенә тирәягына төкөрөп тороуы уның сибәрлеген - яһалма, ағастар, тирә-яҡ мөхит тураһында күп белеүен - ялған, ә күңелен ғәмһеҙ, ҡаты, хатта боҙоҡ итеп күрһәтте. Ундайҙар һеҙҙең арала ла бармы?

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ошо көндәрҙә Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаттары телевидение һәм радио эфирында, киң матбуғат саралары биттәрендә һүгенеү һүҙҙәре әйткән һәм яҙған өсөн язаға тарттырыу тураһындағы закон проектын ҡабул итте. Документҡа ярашлы, журналистар һәм уларға интервью биреүселәр һүгенеү һүҙҙәре ҡулланған өсөн 2-3 мең һум, киң матбуғат саралары етәкселәре 5-20 мең һум, ә юридик шәхестәр (баҫып сығарыусылар) - 20-200 мең һум күләмдә штраф түләйәсәк. Ҡулланырға тыйылған һүҙҙәр исемлеге юҡ, ләкин депутаттар был мәсьәлә хаҡында артыҡ борсолмай һәм һүгенеү һүҙҙәренең ҡулланылыуын һәр айырым осраҡта филологтарҙың махсус эксперт төркөмө билдәләйәсәк, тип белдерә. Закон шулай уҡ интернет селтәрендә эшләгән матбуғат сараларына ла ҡағыла.**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# ЙӨРӘГЕҢ...

## ирейме, әллә эрейме?

**Башҡорт милләтенән булған бөтә балаларға ла туған телен өйрәнеү мөмкинлеге тәьмин ителергә тейеш, сөнки балаларына әсә телен өйрәтеү мәҙәниәте ҡалаларҙа йәшәүсе һәр бер ғаиләлә лә бар, тип әйтеп булмай. Һирәк, бик һирәк әлеге мәҙәниәтте һаҡлаусылар. Шулай булғас, туған тел мәктәп аша, мәктәп мөхитендә мөмкин тиклем киңерәк һәм тулыраҡ бала күңеленә һеңдерелергә тейеш.**

Икенсенән, башҡорт телен туған тел булараҡ мәктәптәрҙә уҡытыуҙың ғәмәлдәге концепцияһы беҙҙең халыҡ ихтыяжы тыуҙырған талаптарға бөтөнләй яуап бирмәй; улай ғына түгел, ә негатив мөнәсәбәт тыуҙыра. Ә бит беҙ тел патриоттарын, уны яратыусыларҙы, уға тоғро ҡалыусыларҙы тәрбиәләргә, үҫтерергә тейешбеҙ. Үҙ теленә һоҡланыу, унын менән ғорурланыу һәр башҡорттоң күңелендә йәшәргә тейеш. Ә тел дәресенә ытырғанып ҡараған балаға ошо сифаттарҙы һеңдереп буламы? Юҡ, әлбиттә. Ә инде бала үҙ халҡы тарихын, ул тыуҙырған мәҙәниәтте, уның ғөрөф-ғәҙәттәрен, туған телебеҙҙең үҙенсәлектәрен (мәҫәлән, *ҫ, ҙ, һ* төрки телдәре араһында бер башҡорт телендә генә бар) һ.б. белһә, юғарыла әйтелгән сифаттар бермә-бер артыр ғына.

Өсөнсөнән, шөкөр, туған телебеҙ әле бер нисә радио каналынан көнө-төнө, оҙаҡ ҡына ваҡыт телевидениенан да яңғырап тора. Бына ошо миллионлаған кеше ҡараған, тыңлаған тапшырыуҙар теле ул саф башҡортса булырға тейеш. Юғиһә, диктор, алып барыусы телерадиожурналистарҙың тел хаталары көндән-көн, айҙар, йылдар буйына ишетелеп тороп, ҡолаҡтарға һеңеп, уҡытыусылар, уҡыусылар теленә лә күсә башланы. Мин әле шундай бер нисә хатаны ғына билдәләп китәм: *ҡарамаҫтан, сигенмәҫкә, бөтмәҫ-төкәнмәҫ, бармам* кеүек һүҙҙәрҙә баҫым урынын *-маҫ, -мәҫ, -мам, -мәм* ялғауҙары алдына ҡуйып, тупаҫ, ҡолаҡты ярырҙай хаталарҙы беҙҙең радио һәм телевидение көн дә халыҡ ҡолағына яуҙыра ғына. Тағы ла миҫал. Башҡорт телендә "*а*" өнө "*оа*" тип әйтелмәй, ә беҙҙең радио, телевидение "*оа*"ны нормаға индереп бара: "*ҡоара, ҡоарға*", "*оалма, оалдым*".

Тағы ла һүҙҙәрҙе мәғәнә үҙенсәлегенә ҡарап ҡулланмау шулай уҡ туған тел файҙаһына түгел. Мәҫәлән, *ирей-эрей* - икеһе ике һүҙ. Тәүгеһе ҡатынан шыйыҡҡа, йомшаҡҡа әйләнеү: *боҙ ирей, йөрәк ирей. Эреү* - ул сифат яғынан үҙгәреү: *һөт эреү*. Әгәр йөрәк эрегән икән, уны сығарып ташларға кәрәк, тимәк, ул боҙолған, тигән һүҙ.

**Вәкил ХАЖИН,**
**педагогика фәндәре кандидаты.**

✓ *Зәйнулла, ҡустыһы Фәтҡулла менән бик күп башҡорт батырҙарының көрәшен, ғауға-һуғыштарҙы, бәхәстәрҙе тыңлап үҫә. Уның кескәй генә хисле күңеле һәр ваҡыт солохлоҡто, тигеҙлекте, ғәҙеллекте, сафлыҡты талап итә.*



*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*

**Шифалы ямғыр ултырып яуа. Ҡуйы ҡара болот, уҡмашҡан йомар йоҙороғон теткеләнгән һыу быуы эсенә тығып болғап, уларҙы тарата ла, ваҡ ҡына ямғыр күҙәнәктәрен иләп, ерҙе шифалы һыу менән ҡойондора. Беҙҙә бындай ямғырҙы, ултырып яуа, тиҙәр. Болот ҡапыл аяҙығандай булып тишелһә йә таралып китһә, аҡҡан болоттарҙы эске һағышыма солғанып оҙатам да, уларҙың тағы килеүен көтәм. Әйләнеп килә ул болоттар! Һутлы тәғәме менән тағы ла туғайҙарҙы, тау-урмандарҙы туйындырып, тирә-йүнгә йәшеллек һәм йәм тарата. Сарсап, көйөп, үлемһерәп яткан ер терелә! Мең төрлө сәскәләр, йәшеллек донъяны биҙәр. Ул йәм, ул матурлыҡ кешеләрҙе лә йәнләндерә, рухтарын, күңелдәрен һуғара. Ә кешене бит рухы йөрөтә…**

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ РУХИ ШАҺЫ…



## Зәйнулла ишан тураһында тағы бер кәлимә һүҙ

Рух та кеше күңелендә болот кеүек. Йә сатрашландырып йәшнәп ямғыр яуҙыра, йә үҙ эйәһе күңелендә тыныс ҡына йөҙөп йөрөй. Тышҡа бәреп сығырҙай юл тапһа, һис шикһеҙ, йәмғиәткә хеҙмәт итерҙәй маҡсат тыуҙыра. Маҡсаты хужаһын алға әйҙәй. Тау аҡтарта, даръя кистерә. Зиһенлеләрҙән йәмғиәтте етәкләрлек тәғлимәт тыуҙыра. Быуаттар үтеп, ул зиһенленең фекер ептәре тарҡалып бөткән кеүек булһа ла, беҙ көндәлек тормошта унын менән ҡулланыуҙы дауам итәбеҙ икәнлеге асыҡлана. Тик хәҙерге заман кешеһенә ул алымдарҙың мәғәнәһе барып етмәй. Үҙебеҙҙе динле йәки динһеҙ итеп тойһаҡ та, һәр кемдең күңелендә үҙе инанған эске Аллаһы барлығын да беләбеҙ.

Әммә нисек кенә булмаһын, бөгөнгө дин әһеле боронғо фекерле кеше булырға тейеш түгел. Ул бөгөнгө мөхиттә, бөгөнгө йәмғиәттә, бөгөнгө сәйәсәт эсендә йәшәй икән, дини белемен ҡулланып, йәмғиәтсә фекерләргә бурыслы. Һәр төбәк, һәр быуын тарихыбыҙға инеп ҡалған ана шундай үҙ заманынса фекерләгән, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртып йәшәгән дин әһелдәрен беләбеҙ. Бына шундай фани донъялыҡта халыҡтың уй-кисерештәрен үҙ йөрәге аша үткәреп йәшәгән бөйөк дин әһеле, фекер һәм ғилем эйәһе, мәғрифәтсе ерҙәшем Зәйнулла Хәбибулла улы Рәсүлев. Ул бына тағы өҫтән шифалы ямғырын ҡойоп үткән болот шикелле, баҡыйлыҡтан беҙгә ер сикләп йөрөп кире ҡайтты.

Бынан теүәл биш йыл элек беҙ, Башҡортостан йәмәғәтселеге, халыҡтың рухи шаһы Зәйнулла Рәсүлевтың тыуыуына 175 йыллыҡты билдәләгәйнек. Халҡыбыҙҙың рухи шаһының тормош юлы төрлө авторҙар тарафынан ярайһы уҡ киң яҡтыртылһа ла, унын тормош юлы, ҡайһы бер остаздары һәм тормош ваҡиғалары тураһында әле яҙылмағандар ҙа етерлек. Зәйнулла ишандың ерҙәше булараҡ, унын тормошононң ҡайһы бер ағышына өҫтәмә мәғлүмәттәр бирмәксемен.

Зәйнулла Хәбибулла улы Рәсүлев 1833 йылдың 25 мартында Ырымбур губернаһы Өстамаҡ өйәҙе Туңғатар олоҫононң хәҙерге Учалы районының Шәрип (Әүәз) ауылында донъяға килә. Нәҫел-нәсәптәре буйынса - ҡыуаҡандар. Улар борон-борондан уҡ Табын ҡағанаты эсендәге Барын Табын, Ҡара Табын, Күбәләк, Тиләү, Кесе Йомран, Кәлсер, Дыуан, Әйле ырыуҙары менән туғандаштар. Ҡыуаҡандар бөгөн дә Барын Табындар менән бергә йәшәйҙәр. Был күренешкә көнсығыш, йәки Урал алды табындарының даулы тарихы шаһит.

Ә ул ваҡиғалар тураһында хәтирәләр халыҡта бик күп ине. Бигерәк тә Көсөк батыр ҡатнашлығындағы "Күл һуғышы"нда еңеүҙәре өсөн йә ғорурланып, йә ҡыҙыулыҡтары сәбәпле тәбиғәт ҡапҡанына эләгеп, күптәренең көтмәгәндә һәләк булыуҙары өсөн үкенеп, хатта әсенеп һөйләй торғайнылар элегерәк.

Борон яҙмалар күп булған. Улар мәсеттәрҙә һаҡланған. Әммә мәсеттәр ағастан эшләнгәнгә күрә, улар колонизаторҙар тарафынан махсус рәүештә сүпләп яндырылғас, яҙмалар юҡҡа сыҡҡан. Үкенес, ваҡыт менән бергә тарихтың алтын бөртөктәре ҡара ергә күмелеп бөткән.

Йүрүҙән, Әй һыуы буйҙарынан ҡыҫырыҡлап сығарылған ҡыуаҡандар ҡәрҙәш барын-табындарҙан ҡуртымға ер алып, төп Урал армытынан аша унын алдына, көнсығыш битләүҙәренә урынлаша. Дәүләт ғәскәрҙәре менән ҡанлы бәрелештәр һөҙөмтәһендә, әйләләр кеүек үк, ҡыуаҡандар ҙа үҙ ерҙәрен ҡалдырырға мәжбүр була. Шунан Урал армыты аша төшөп, Уй һыуының һул ҡушылдығы Аҡ йылға буйына, төп Уралдың Әнкә һырты менән Һары түр армыты араһына барып урынлашалар. Ләкин 1730-1740 йылдарҙа Золотоустье баҫҡынсылары ул ерҙе лә хәритәгә алып, ҡыуаҡандарҙы ғәскәр менән бынан да ҡыуғас, түбәнерәк төшөп, барындарға ауаз һалалар. Барындар уларға Уй һыуының һул ярынан, Шәрип ауылы ҡаршыһынан ҡуртымға ер бирә. Ауылдың халыҡ ҡушҡан Ауаз, һуңғараҡ йомшартылып әйтелгән Әүәз исеме губерна тарафынан тәстиҡ ителмәй. Шуға ла ул ауыл элек халыҡ телендә Әүәз булып йөрөһө лә, ҡағыҙҙарҙа Шәрип тип яҙыла.

Әммә Зәйнулла тыуғанда ҡыуаҡандар инде Әүәз ауылын төплө нигеҙләп, шунда ултыраҡ тормош менән йәшәгән. Уларҙың йәйләүгә сығып ултырырлыҡ ерҙәре булмаған. Шуға ла улар барындарҙан тәүге килеп ултырған Аҡ йылғаның үренән йәйләү ере һорай. Үҙ-ара ғауғалар ҙа булып ала. Һәм улар оҙаҡ ҡына ваҡыт Аҡ йылғаның башын, Ҡара таш аҫтын йәйләү итеп тотоуға өлгәшә.

Зәйнулла, ҡустыһы Фәтҡулла менән бик күп башҡорт батырҙарының көрәшен, ғауға-һуғыштарҙы, бәхәстәрҙе тыңлап үҫә. Унын кескәй генә хисле күңеле һәр ваҡыт солохлоҡто, тигеҙлекте, ғәҙеллекте, сафлыҡты талап итә. Ул ун бер йәшенә тиклем башланғыс белемде ғаиләһендә һәм күрше Ҡужай ауылында Ҡорамшаларҙың мәҙрәсәһендә ала. Атаһы Хәбибулла, ҡарт аталары Рәсүл, йот йылында малдарын, ә унан алда батша ғәскәрҙәре тарафынан бөтә матди байлыҡтарын талатҡас, фәҡир йәшәй. Өҫтәүенә, арпа йәки тары, һоло сәсерлек тә һөрөнтө ере, тейешле эш ҡорамалдары булмай. Арбаларын, еген аттарын, һуҡа-төрәндәрен, ҡамыт әпсен-төпсөнөн карателдәр алып китә.

Түпһәлдән көнсығышҡа ҡарап ултырған ҡарындыҡ тәҙрәле йортта ғаилә ағзалары араһында ғәҙеллек һәм дөрөҫлөк хөкөм һөрһә лә, таштан һалынған мейестәренән икмәк еҫе һирәк аңҡый. Ауылда һәр береһе йә балыҡсы, йә һунарсы булғанлыҡтан, Урал армыттары уларҙы иттән өҙмәй. Әммә атаһы Хәбибулла улдары Зәйнуллаға һәм Фәтҡуллаға нисек тә булһа белем биреүҙе бурыс итеп ҡуя. Был бурыс, әлбиттә, билдәле Аҙнасура ишанға яҡын ҡан ҡәрҙәш инәһенең дә ҙур теләге һәм фатихаһы булыуға ишара. Зәйнулла ишандың тамыр-нәсбәттәре төбәктең һәр тарафта күренекле булған кешеләренә бәйле. Мәҫәлән, ололар һәм зиһенлеләр хәтерендә быуындан-быуынға бирелә килгән сәйер холоҡло кеше, халыҡ араһында "Уау диуана" тип йөрөтөлгән күрәҙәсе һәм халыҡ табибы Вәхит тураһында ла иҫкә алмау яҙыҡ булыр. Беренсенән, Вәхит диуана кешенең алдағы яҙмышын әйтеп биреүсе булған. Ауырыуҙарҙы, яралыларҙы ҡайын дегете, ылыҫлы ағас сайыры, әрекмән тамыры, алтын тамыр, унын оҡшаштары, андыҙ һ.б. үләндәр һәм есемдәр менән дауалаған.

Суфыйсылыҡ тәриҡәте бөгөнгө Учалы районы Аҙнаш ауылына ҡыуаҡан ырыуы кешеһе Аҙнасура ишан тарафынан Уралтау артынан, Әй буйынан тәүләп килтерелгән кеүек. Тарих ағышынан һәм ваҡиғалар теҙмәһенән Аҙнасура ишандың Вәхит күрәҙәсенән байтаҡҡа оло булыуы төҫмөрләнә. Суфыйсылыҡ тәриҡәте традицион исламдан үҙенең алымдары менән, ҡайһы бер урында йөкмәткеһе менән дә айырмалы булған. Барындар тәүҙә уны ҡабул итмәгән. Бигерәк тә Ҡөрьән сүрәләрен уҡығанда ҡапыл тауыш тулҡындарын үҙгәртеп ебәреү, уларҙы йә күтәреп, йә ауазын соҡорҙан сығарған кеүек һәр төрлө хәрәкәттәр яһап башҡарыу тыңлаусыларҙы аптыратҡан. Мәҫәлән, Уау Вәхит дәрүиш, шул төбәктә йәшәгән халыҡ Күк бүре нәҫеленән булған, тип, уларҙың ҡайһы береһенә бүрегә эйәреп олоуҙы талап иткән. Үҙе лә һәр ваҡыт кистәрен бүре булып олоһа, Урал армыттары араһындағы Уй таштары тауындағы бүреләр Уау Вәхитте берҙәм күтәреп алған. Шуға ла уға "Уау" ҡушаматы тағылған да инде. Ә "диуана" ҡушаматына килгәндә, унын ҡылыҡ-ҡылаништары ғәҙәти кешенекенә оҡшамаған булған. Әммә үҙе бик зирәк, үткер телле фекер эйәһе булып танылған. Мәҫәлән, ул кеше күрмәгән ерҙә таҡмаҡлап, бик ихласлап, төрлө хәрәкәттәр яһап, үҙ алдына бейегән. Тимәк, унда бейеү һәләте булған. Мейеһендә бейеү хәрәкәттәре яралмаһа, ул бейемәҫ ине.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Ҙур һөҙгөс, миңә мәғлүм булыуынса, башҡорттарҙа Ағиҙел йылғаһының түбәнге ағымында ҡулланылған. Ғәҙәттә, унын менән боҙ киткәндә, йылғаларҙа һыу болғансыҡ булғанда яр эргәһендәге балыҡтарҙы һөҙгәндәр.

Балыҡсы балыҡты эҙләп тапҡас, уны һуғып алыу ике төрҙә ҡулланылған: шаңҡытыу һәм төнөн сыраҡ яҡтыһында сәнсеү. Башҡорттар балыҡты тик көҙөн, ҡар яуғанға тиклем боҙ аҫтында шаңҡытҡан. Йоҡаҡ боҙ аҫтында тупланған балыҡ тубын асыҡлағас, шул урынға суҡмар менән ныҡ итеп һуҡҡандар. Шаңҡыған балыҡ эсе менән әйләнеп ятҡан, боҙ уйылған һәм балыҡты һыуҙан һөҙөп алғандар. Был эш менән, нигеҙҙә, малайҙар һәм үҫмерҙәр шөғөлләнгән.

Башҡортостанда сыраҡҡа төшөү һәр урында ла ҡулланылған, әммә ҡоралдар һәр урында үҙенсә булған.

Сыраҡҡа төшөүҙең иң ябай ысулы таулы Башҡортостанда күҙәтелгән. Унда, үтә күренмәле, саф, таҙа һыулы тау йылғаларында балыҡты осонда суҡмар кеүек ороһо булған ябай таяҡ менән дә һуғып алғандар. Бик йыш был маҡсатта нәҙек, әммә оҙон ҡалаҡ файҙаланғандар. Сыраҡҡа төнөн, бер нисә кеше йыйылып төшкәндәр. Балыҡсыларҙың бер нисәһе ҡалаҡтар менән һыу эсенән, ә башҡалар арҡаларына туҙлы йәки сайырлы сыраҡтар тултырылған тоҡ аҫып, яр буйынан барған һәм даими рәүештә сыраҡ яндырып, йылғаны яҡтыртҡан. Ҡайһы берҙә балыҡсылар үҙҙәре лә һыу эсендә сыраҡ яндырып барған. Балыҡтарҙың тупланған урынын табыу менән яҡтылыҡ сығанағын шунда уҡ ситкә алып киткәндәр. Был балыҡтарҙы йоҡоһонан уятмау өсөн эшләнгән. Ҡалаҡ йәки һалдау менән балыҡтың башы тирәһенә, умыртҡа һөйәген һындырырлыҡ итеп һуҡҡандар. Ҡайһы берҙә балыҡтың башы өҙөлгәнсе һуғылған. Ҡалаҡ менән уңышлы итеп төптә ятҡан йәки йылға төбөнә яҡынраҡ ятҡан балыҡты ғына һуғыу мөмкин булған. Бик йыш был ысул менән балыҡ тотҡанда һалдау, сәнске ҡулланғандар. Һалдауҙар дүрт йәки биш тешле булған. Балыҡты кәмәлә йөрөп, сыраҡ яҡтыһында сәнсеп алыу бик һирәк күҙәтелгән.

Күлдәр эргәһендә йәшәүсе башҡорттар балыҡты иртә яҙҙан, ул ыуылдырыҡ сәскән ваҡытта һуҡҡан. Күл ситтәренән һыҙалар барлыҡҡа килеү һәм ҡамыш араһында боҙ ирей башлау менән балыҡтар күпләп шунда йыйылған һәм ыуылдырыҡ сәскән. Уларҙы балыҡсылар ҡарап ҡына торған һәм һалдау ярҙамында алған.

Ағиҙел йылғаһының урта ағымында башҡорттар балыҡты ҡаты һыуыҡтарҙа тотҡан. Был ваҡытта балыҡтар тәрән урындарҙа, сөңгөлдәрҙә йыйылған. Сөңгөл өҫтөндә ҡойо уйылған һәм шул урынға балыҡ йыйылыу менән уларҙы һалдау менән сәнсеп алғандар.

Ҡайһы берҙә башҡорттар балыҡты ҡоралдан атып та тотҡан. Был ысул уларҙың ыуылдырыҡ сәскән ваҡытында тормошҡа ашырылған. Атыу ҡоралы итеп махсус эшләнгән уҡтар файҙаланылған.

***✓ Беҙҙең өсөн фәһем алырлыҡ һәм беҙҙе уйланырға мәжбүр итерлек тағы бер тарих: йәһүдтәрҙең ғәрәптәрҙән ер һатып алып, улар араһына үтеп инеүе, нығыныуы һәм хәҙерге Израиль дәүләтен төҙөүе тарихы.***

# Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ,

## Бүтәнсә юҡ сарабыҙ…

**Башҡорттоң тарихи үткәне менән күптән ҡыҙыҡһынған һәм был тарихтың ергә ҡағылышлы фажиғәле мәлдәре менән хәбәрҙар кеше булараҡ, мине ҡайһы бер милләттәштәребеҙҙең ергә битараф мөнәсәбәте күптән борсой. Ә быңдай битарафлыҡтың эҙемтәләре ҡот осҡос булырға мөмкин. Шәйхзада Бабич әйткәнсә:**
**Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ,**
**Бүтәнсә юҡ сарабыҙ.**
**Тупраҡ китһә, һау бул, донъя,**
**Өҙөлмәктер самабыҙ.**
**Ер менән бәйле һабаҡтар, фекерҙәрем менән уртаҡлашырға тип, ҡулға тағы ҡәләм алдым.**



### Һабаҡ биреп тора тарих

Яңыраҡ ЛДПР-ҙың Дәүләт Думаһындағы бер депутаты, алпауыт ерҙәрен (поместьеларҙы) тергеҙергә кәрәк, тигән тәҡдим яһаны. Белеүебеҙсә, власть халыҡтың теге йәки был мәсьәләгә ҡарашын белер өсөн ЛДПР депутаттары аша, урыҫса әйткәндә, "пробный шар" тигән ысулды ҡулланырға ярата. Улар, ғәҙәттә, алдан ҡапаҡлап, тауыш сығаралар һәм халыҡтың реакцияһын ҡарайҙар. Әгәр халыҡ өндәшмәһә, тәҡдим үтә лә китә.

Был осраҡта ла шулай булыуы ихтимал. Әгәр был алпауыт ерҙәрен тергеҙеү тигән тәҡдим ысынлап та үтеп китһә, беҙҙең ерҙәргә, XIX быуаттағы кеүек, үҙәк Рәсәйҙән тағы ла төрлө алпауыттар килеп туласаҡ һәм башҡорт тағы ерһеҙ ҡаласаҡ. Революцияға тиклемге тарих ҡабатланасаҡ. Был осраҡта Латин Америкаһындағы латифундиялар барлыҡҡа килгәндәге хәл килеп тыуасаҡ. Латифундистарҙың күбеһенең Латин Америкаһы дәүләттәренә бер ҡыҫылышы ла юҡ ине. Төрлө мутлыҡтар ҡулланып, урындағы халыҡты (индеецтарҙы) ерһеҙ ҡалдырыу арҡаһында, ошо латифундистар менән ерҙең ысын хужалары араһындағы низағтар Латин Америкаһы дәүләттәрендә шул замандан алып хәҙергә тиклем дауам иткән революциялар тыуҙырҙы һәм ул илдәрҙә һаман тыныслыҡ урынлаштыра алмайҙар.

Ер мәсьәләһе Рәсәй өсөн дә бик хәүефле, киҫкен тора. Ошоно аңлаған большевиктар крәҫтиәндәргә ер вәғәҙә итеп, уларҙы үҙ яғына ауҙарған. Ер алырға, уға хужа булырға өмөтләнгән крәҫтиәндәр 1917 йылғы революцияла һәм граждандар һуғышында большевиктарҙың еңеүенә булышлыҡ иткән. Былары - тарих. Әммә тарих, нишләптер, гел генә ҡабатланырға ярата. Унан өйрәнергә, һабаҡ алырға теләмәгәндәрҙе ул ныҡ ҡына итеп аҡылға ла ултырта. Аҡыллылар икенсе халыҡ тарихынан фәһем алып өйрәнһә, иҫәрҙәр иһә үҙ хаталарын ҡабатлап тора, тиҙәр. Беҙгә шул икенселәре урынында булмаҫка ине. Шул иҫәрҙәр урынында ҡалмаҫ өсөн тарихҡа ҡабат-ҡабат күҙ һалырға кәрәктер, тип уйлайым.

### Әзериҙәрҙең һабаҡ алғаны

Һүҙемде әзербайжан милләтенең фажиғәһенә әйләнгән Таулы Карабахтан башлағым килә. Билдәле булыуынса, хәҙер бөтә халҡын тип әйтерлек әрмәндәр тәшкил иткән Таулы Карабах автономиялы өлкәһе совет власы йылдарында Әзербайжан республикаһы составында ине. Был ерҙәр Рәсәй империяһына ҡушылғанға тиклем Иран дәүләтенә буйһонған әзербайжан хандарының ере була. Рәсәй империяһы 1826-1828 йылдарҙа Иранға ҡарата алып барған һуғышта еңгәндән һуң, был ике дәүләт 1828 йылда Туркманчай килешеүе төҙөй һәм Төньяҡ Әзербайжан, шул иҫәптән уның составындағы Таулы Карабах ерҙәре лә Рәсәй дәүләтенә ҡушыла. Был мәлдә ул ерҙәрҙә тулыһынса әзериҙәр йәшәгән була. Рәсәйгә ҡушҡандан һуң, бай әрмән сауҙәгәрҙәре үтенесе буйынса, батшаның рөхсәте менән ул ерҙәргә ике йөҙгә яҡын әрмән ғаиләһе күсерелә. Бына ошонан башлана ла инде ул ерҙәрҙә әрмәндәр тарихы. Был турала мин хәҙерге заман тарихсылары яҙғандарҙан түгел, ә XX быуаттың 80-се йылдарында хәҙер мәрхүм шағирыбыҙ Вил Ғүмәровтың шәхси китапханаһында һаҡланған XIX быуат энциклопедияһынан уҡығайным.

XIX быуат тарихсылары әле генә булып үткән ваҡиғалар менән беҙгә ҡарағанда яҡшыраҡ таныш булғандарҙыр, тип уйлайым. "Кем ере булған?" тигәндә, мин совет тарихсыларына түгел, ә элекке XIX быуат тарихсыларына ышанырға мәжбүрмен. Уларҙы әзериҙәр яғын ҡайғыртҡан, тип ғәйепләп булмай, сөнки әзериҙәр - мосолман, ә христиан урыҫтарҙың симпатияһы үҙҙәренә диндәш, тимәк, рухташ та булған әрмәндәр яғында булғаны бөтәбеҙгә лә мәғлүм. Был әле лә шулай. Һәм әрмәндәр үҙҙәренең сәйәси уйындарында бының менән әле булһа оҫта файҙалана. Шуға күрә, әгәр ҙә урыҫ тарихсылары баяғы Таулы Карабах ерҙәрен "әзериҙәр ере", тип яҙған икән, был мәғлүмәтте ысынға тап килә тип ҡабул итергә кәрәк. Әлбиттә, әрмән тарихсылары: "Ул ерҙәр борон-борондан әрмән ере булған. Төркиҙәр, тимәк, әзериҙәр ҙә, был ерҙәргә бик һуң, әрмәндәрҙе ҡыҫырыҡлап килеп ултырған", - тип яҙа. Быныһы инде совет власы йылдарында барлыҡҡа килгән "тарих".

Батша властары Иран менән Төркиә кеүек мосолман дәүләттәренә ҡарата алып барған колониаль сәйәсәтендә христиан әрмәндәрҙе тәбиғи союздашы һанай. Шуға күрә лә, әрмәндәрҙе үҙ мәнфәғәттәрендә файҙаланыу өсөн ерҙәр биреү кеүек ымһындырыу сараларын ҡуллана. Һөҙөмтәлә, XIX быуат башында тулыһынса әзериҙәр йәшәгән Карабах йөҙ йыл эсендә әзери ерҙәренән әрмән ерҙәренә әйләнә. "СССР" тигән дәүләт юҡҡа сығыу менән Әзербайжан республикаһы уртаһындағы Карабах менән Әрмәнстанды айырып торған аралағы бер нисә районды баҫып алып, әрмәндәр Таулы Карабахты үҙ ерҙәренә ҡушалар. Хәҙер тиҫтә йылдан ашыу Таулы Карабах Әзербайжан халҡының һәм дәүләтенең иң оло фажиғәһенә әйләнде.

### Ғәрәптең һабаҡ алғаны

Беҙҙең өсөн фәһем алырлыҡ һәм беҙҙе уйланырға мәжбүр итерлек тағы бер тарих: йәһүдтәрҙең ғәрәптәрҙән ер һатып алып, улар араһына үтеп инеүе, нығыныуы һәм хәҙерге Израиль дәүләтен төҙөүе тарихы. Билдәле булыуынса, беҙҙең эраға ҡәҙәр 54 йылда Рим прокураторы Понтий Пилат бөтә йәһүдтәрҙе, Рим империяһына ҡаршы баш күтәргән өсөн, үҙ ерҙәренән ҡыуып ебәрә. Бына ошо ваҡыттан алып 1947 йылға тиклем йәһүдтәр ер йөҙөнөң бөтә тарафтарына ла таралып, бөтәһе тарафынан да ҡыйырһытылып, тибелеп, туҙырап йөрөй һәм бына шул ике мең йыл буйы үҙ дәүләттәрен тергеҙеү тураһында хыяллана. Ошо хыял һәм донъяның төрлө ерҙәрендә ваҡыт-ваҡыт ойошторолған туҡмауҙар, йәшәгән ерҙәренән ҡыуалап ебәреү кеүек төрлө йәберһетеүҙәрҙән туйған йәһүдтәр XIX быуаттың икенсе яртыһында, йыйылышып, үҙ дәүләтен төҙөү мәсьәләһен ҡырҡыу мәсьәләгә әйләндереп, төрлө һүҙ йөрөтөүҙәрҙән ғәмәли сараларға күсеү юлына баҫырға мәжбүр була. Улар төрлө илдәрҙән яйлап-яйлап ғәрәптәр йәшәгән урындарға күсенеп ултырып, урындағы халыҡтан ер һатып ала башлай. Бер нисә йәһүд ғаиләһе күсеп килеп, ер ала ла, эргәһенә туғандарын, улары булмаһа, таныш-белештәрен, милләттәштәрен саҡырып алып, уларға ла ер алырға ярҙам итеп, әкренләп кенә ғәрәптәр араһында йәһүд ауылдарын, ҡасабаларын барлыҡҡа килтерә. Шулай итеп, XIX быуат һәм XX быуаттың башы ер алыу, унда нығыныу кеүек мәсьәләләрҙе хәл итеү менән үтеп китә. Был ваҡыт эсендә яңы ерҙәрҙә йәһүдтәрҙең бер нисә быуыны үҫеп етеп, ергә берегә, нығына, улар унда күпселекте тәшкил итә башлай. Хәҙер иһә ролдәр алмашына - йәһүдтәр үҙҙәре ғәрәптәрҙе ҡыҫырыҡларға тотона, элекке ер хужаларына түҙеп тормаҫлыҡ тормош тыуҙыра. "Өлкән ағай" әйтмешләй, "Кузяның әсәһен күрһәтәләр". Ғәрәптәр килеп тыуған хәлгә сыҙамай, үҙҙәре үк йәшәгән ерҙәрҙән ҡасып, милләттәштәре күберәк ҡалған ерҙәргә күсеп китә башлай. Германияла Гитлер власҡа килеп, йәһүдтәрҙе күпләп ҡыра башлағас, бөтә донъя йәмәғәтселеге йәһүдтәрҙе яҡлап сыға. Йәһүдтәр ошонан файҙаланып, үҙ дәүләтен төҙөү тураһындағы мәсьәләне ҡырҡыу сәйәси мәсьәләгә әйләндерә һәм 1947 йылда Израиль дәүләте төҙөлә. Дәүләт төҙөлөү менән йәһүдтәр ғәрәптәрҙең ҡалған ерҙәрен дә баҫып алып, Израиль дәүләтенең ерҙәрен киңәйтеүгә өлгәшә. Өлгәшеүен өлгәшәләр ҙә, тик бына дәүләттә тынғылыҡ урынлаштыра алмайҙар. Ғәрәптәр менән Израиль араһында иреш-тартыш, ҡан-ҡойош һаман дауам итә. Быныһын инде бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ.

### Башҡорттоң һабаҡ алғаны

Күреүебеҙсә, ергә үтеп инеү, уны үҙләштереүҙең, уға хужа булып китеүҙең ысулдары әрмәндәрҙә лә, йәһүдтәрҙә лә - бер үк.

Хәҙер үҙебеҙгә әйләнеп ҡайтайыҡ. Әле үрҙә миҫалға килтерелгән әзери-әрмән, ғәрәп-йәһүд араһындағы фажиғәле

***Буш ятҡан, әммә мал көтөү өсөн ифрат уңайлы ергә башҡорттарҙың күршеләре - ҡаҙаҡтар ҙа ҡыҙыға башлай. Һәм ҡаҙаҡтар батша властарынан ошо ерҙәрҙә әҙ генә ваҡытҡа - йәй көндәре йәйләп, мал көтөп торорға һорайҙар. Батша власы ваҡытлыса йәйләргә рөхсәт бирә. Әкренләп кенә күршеләребеҙ был ерҙәргә өйрәнеп, эҫенеп китә. Бер нисә тиҫтә йыл үтеүгә, улар бында йәйләп кенә түгел, ҡышлай башлайҙар һәм нығынып алалар. Башҡорттарға унда инеү тыйыла. Яйыҡ казактары ла тығыла алмай. Йөҙ йыл эсендә күп нәмә онотолоп бөтә. Һәм ҡаҙаҡтар был ерҙәрҙә революцияға тиклем тамам нығынып алалар. Революциянан һуң был ерҙәрҙе совет власы ҡаҙаҡтарға бирә. Берәү ҙә элекке ер хужалары булған башҡорттарҙан һорап та, уларҙың фекере менән ҡыҙыҡһынып та тормай. Зәки Вәлиди хөкүмәте ерҙәрҙе ҡайтарырға маташып ҡарай, әммә был үтенес яуапһыҙ ҡала. Ул замандарҙа инде был ерҙәрҙә башҡорттар бөтөнләй булмай, тип әйтерлек.***

> ✓ *Ер һатыуға ҡаршы булған күпме ир-егеттең башы властар тарафынан төрмәләрҙә, һөргөндәрҙә серетелә. Уларҙың аянысла яҙмышы тураһында халҡыбыҙ күпме йырҙар сығарған.*

талаш-тартыштарҙың сәбәбе ер менән бәйле булған кеүек, башҡорт тарихының да иң ҡанлы биттәре ергә талаш менән бәйле. Үҙебеҙҙең башҡорт тарихынан да бындай миҫалдарҙы бихисап табырға була. Мәҫәлән, XIX быуат башында батша властары, Яйыҡ казактарының үтенесе буйынса, хәҙерге Саратов өлкәһенән көньяҡтараҡ Әстерхан өлкәһенә яҡыныраҡ йәшәгән Сәҙе буйҙары башҡорттарын үҙ ерҙәренән ҡыуып сығара. Ҡыуыуын ҡыуа, әммә казактар ҙа ул ерҙәргә бигүк инергә ашыҡмай. Сөнки был ерҙәрҙең башҡорттоҡо икәнен дә, башҡорттоң ер өсөн ҡан ҡойорға әҙер булыуҙарын да казактар яҡшы белә. Яйыҡ казактары был ерҙәргә күптән, Иван Грозный заманынан уҡ ҡыҙығып, ошо ерҙәрҙе башҡорттарҙан тартып алып, властарҙан үҙҙәренә биреүҙе үтенәләр. Әммә башҡорттоң ер өсөн бер туҡтауһыҙ баш күтәреүенән йонсоған батша властары бындағы башҡорттарға тейеүҙән оҙаҡ ҡына тыйылып килә. XIX быуатта башҡорт баш күтәреүҙәре ҡурҡынысы юҡҡа сығып, власть нығынып алғас, батша башҡорттарҙы үҙ ерҙәренән ҡыуып ебәрә. Әйткәнемсә, тартып алынған ер оҙаҡ ҡына буш ята. Ерҙе һатыу өсөн аукцион ойоштороп ҡарайҙар, әммә унда ҡатнашырға берәү ҙә ҡыймай, сөнки был ерҙәрҙең башҡорттоҡо икәнен дә, янъял булыу ихтималлығын да бөтәһе лә белә.

Буш ятҡан, әммә мал көтөү өсөн ифрат уңайлы ергә башҡорттарҙың күршеләре - ҡаҙаҡтар ҙа ҡыҙыға башлай. Һәм ҡаҙаҡтар батша властарынан ошо ерҙәрҙә әҙ генә ваҡытҡа - йәй көндәре йәйләп, мал көтөп торорға һорайҙар. Батша власы ваҡытлыса йәйләргә рөхсәт бирә. Әкренләп кенә күршеләребеҙ был ерҙәргә өйрәнеп, эҫенеп китә. Бер нисә тиҫтә йыл үтеүгә, улар бында йәйләп кенә түгел, ҡышлай башлайҙар һәм нығынып алалар. Башҡорттарға унда инеү тыйыла. Яйыҡ казактары ла тығыла алмай. Йөҙ йыл эсендә күп нәмә онотолоп бөтә. Һәм ҡаҙаҡтар был ерҙәрҙә революцияға тиклем тамам нығынып алалар. Революциянан һуң был ерҙәрҙе совет власы ҡаҙаҡтарға бирә. Берәү ҙә элекке ер хужалары булған башҡорттарҙан һорап та, уларҙың фекере менән ҡыҙыҡһынып та тормай. Зәки Вәлиди хөкүмәте ерҙәрҙе ҡайтарырға маташып ҡарай, әммә был үтенес яуапһыҙ ҡала. Ул замандарҙа инде был ерҙәрҙә башҡорттар бөтөнләй булмай, тип әйтерлек.

Совет власы ла юҡҡа сыҡты. Борон-борондан башҡорттоҡо булған, башҡорт йәшәгән ерҙәр хәҙер үҙаллы Ҡаҙағстан ерҙәре булып китте. Бынан бер нисә йыл элек бер Мәскәү ғалимы, батша властарының стратегик фекерләй белмәүе арҡаһында элек башҡорттоҡо булған ерҙәр, хужаларынан тартып алынып, ҡаҙаҡтарға "ваҡытлыса" тип бирелеү арҡаһында Рәсәй күпме еренән ҡолаҡ ҡаҡты. Ул ерҙәр башҡорттоҡо булып ҡалған булһа, хәҙер ул ерҙәр барыбыр Рәсәйҙеке булып ҡалыр ине, сөнки башҡорт - Рәсәй халҡы, тип яҙып сыҡты. Шулай итеп, был миҫалда Рәсәй батша властарының үҙ морононан ары ҡарай алмауын күрәбеҙҙер.

Беҙҙең ерҙәрҙә килмешәктәр тәүҙә әҙ була. Уларҙы киң күңелле башҡорттар ҡолас йәйеп тигәндәй ҡаршы ала, урынлашырға, нығынырға ярҙам итә. Сөнки ере күп башҡорт үҙенә ниндәй ҡурҡыныс янағанын әле аңламай ҙа. Ситтән килгәндәр беҙҙә нығынып көсәйеп алғас, үҙҙәрен хужа итеп тоя башлай. Бында уларға батша властары ла ярҙам итә. Башҡорттар Рәсәйгә үҙ ирке менән теләп ҡушылһа ла, батша властары уларға бер ҡасан да ышанмай, гел шикләнеп ҡарай, башҡорт ерҙәрен нисек тә булһа Рәсәй дәүләтенә нығыраҡ бәйләү тураһында уйлай. Шуға күрә лә башҡорт ерҙәренә күпләп икенсе халыҡтарҙы күсереү яғын ғына ҡайғырта. Сөнки әтәмбайҙар ерҙе урыҫ батшаһынан алғас, уға йәне-тәне менән хеҙмәт итәсәк бит. Властар һәр саҡта ла килмешәктәр яҡлы булып ҡала, сөнки улар властарҙың таянысына әйләнә.

XIX быуатта тамам бөлдөрөлгән башҡорт үҙ ерен күпләп һата башлай һәм әллә күпме еренән ҡолаҡ ҡаға. Ер һатыуға ҡаршы булған күпме ир-егеттең башы властар тарафынан төрмәләрҙә, һөргөндәрҙә серетелә. Уларҙың аянысла яҙмышы тураһында халҡыбыҙ күпме йырҙар сығарған.

Беҙ үҙебеҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың ерҙәрен арзанға ғына (бушлай, хатта бер нисә әсмуха сәйгә, тип әйтерлек) һатып бөткәндәренә аптырай инек. Бына шул көндәр яңынан алдыбыҙға килеп баҫты түгелме? Элек сәйгә алданһалар, хәҙер араҡыға алданыу ҡурҡынысы бар. Араҡы менән күҙе-башы томаланған кешегә бер нәмә лә кәрәкмәй. Ул әллә нәмәһен дә һатып ебәрер. Уға милләт яҙмышы ла, балаларының киләсәге лә кәрәкмәй. Ул тик бөгөнгөһө менән генә йәшәй

Халыҡ яҙмышы өсөн ерҙең ни тиклем мөһим мәсьәлә икәнен, уның ҡәҙерен аңлаған аҡыллы түрәләр ҙә осрай боронғо тарихта. Бик тә боронғо замандарҙа төркиҙәрҙең һунн тигән тоҡомо йәшәгән. Тарихсылар башҡорттоң формалашыуында һунндарҙың да ҡатнашлығы бар, ти. Бына шул һунндарға күрше йәшәгән халыҡтың батшаһы һунндарҙың Моде тигән батшаһынан уның иң шәп атын һәм ҡатынын һорай. Батшаның кәңәшселәре, бирергә ярамай, күршеләр беҙҙе мыҫҡыл итергә уйлай, тигәнерәк кәңәш бирә. Моде, ат өсөн, ҡатын өсөн күршеләр менән талашмайыҡ, тип, һорағандарының бөтәһен дә бирергә ҡуша. Күпмелер ваҡыт үткәс, ошо уҡ күршеләр һунндарҙан берәү йәшәмәгән, мал көтөү өсөн бөтөнләй яраҡһыҙ ташлы, сүллекле берәүгә лә кәрәкмәгән ерҙәрен һорайҙар. Кәңәшселәр, бирәйек, барыбер буш ята бит, тигәнерәк кәңәш итәләр. Ә Моде нишләй һуң? Ер халыҡтың йәшәү нигеҙе, уны нисек бирмәк кәрәк, ти һәм был мәсьәләне ыңғай хәл итергә кәңәш биргән бөтә кәңәшселәрҙең баштарын киҫеп ырғыта. Шунан һуң Моде күршеләренә яу асып, элек биргәндәрен дә, бирмәгәндәрен дә, бөтәһен дә артығы менән кире ҡайтарып ала.

Бик боронғо замандарҙа йәшәгән Моде, ергә мөнәсәбәт нисек булырға тейеш, тигән бик тә аҡыллы һабаҡ биреп киткән беҙгә. Үҙебеҙҙең халыҡ араһында ла аҡыллы уйлап эш итә белгән ир-егеттәребеҙҙең етерлек булғанлығына башҡорттоң "Урал" тигән халыҡ йырындағы "аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын" тигән юлдарҙан да күрергә була. Беҙгә шул аҡыллыларҙан өйрәнергә, һабаҡ алырға кәрәк, милләттәштәр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Онотмайыҡ, 1919 йылда башҡорттар Рәсәйҙең "Башҡортостан" тигән автономиялы республикаһын һәм хөкүмәтен әллә күпме аҫыл ир-егеттәрен юғалтып, ҡандарын дарьялай ҡойоп, ана шул киҫкен ер мәсьәләһен хәл итеү, был донъяла халыҡ булараҡ һаҡланып ҡалыу кеүек ҡырҡыу, аяуһыҙ һорау алдыбыҙға килеп баҫҡанға, үҙ мәнфәғәттәрен яҡлауҙың иң һуңғы сараһы булараҡ төҙөй. Ленин һәм уның эйәрсендәре башҡорттар менән 1919 йылғы Килешеүҙе беҙҙең халыҡтың милли хоҡуҡтарын танығандан түгел, килеп тыуған сәйәси хәлде нисек тә булһа йомшартыу өсөн төҙөй, нығынып алғансы, теләһә ниндәй ташламалар яһарға, башҡорттар ҡуйған шарттарға ризалашырға мәжбүр була. Үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғына эйә булған башҡорттар Ленин большевиктары яһаған революциянан һуң ерһеҙниһеҙ тороп ҡала. Быны беҙ яҡшы беләбеҙ. Ерһеҙ ҡалған халыҡ икенсе халыҡтар араһында ирепюғалыуға дусар ителә. Тарихтан быға бихисап миҫалдар килтерергә мөмкин. Йәһүдтәр - ситкә ҡыуып таратылғандан һуң әллә нисәмә быуат үткәс, юғалтҡан ерҙәрен кире ҡайтарып алып, унда үҙ дәүләтен тергеҙеүгә ирешкән берҙән-бер халыҡ. Был - кешелек тарихында берҙән-бер феномен.**

**Беҙгә тарихта булып үткән ваҡиғаларҙан фәһем алып, уларҙан өйрәнергә кәрәк. Аҡыллы кеше сит кеше хатаһында өйрәнә, тиҙәр бит. Тарих тырмаһына ҡабат-ҡабат баҫмайыҡ, халыҡтар тарихы биреп торған һабаҡтар беҙгә лә фәһем булһын. Ер мәсьәләһендә бигерәк тә. Киләсәк быуынды ерһеҙ ҡалдырһаҡ, улар беҙҙе ғәфү итмәҫ. Ер мәсьәләһендә бөгөн битараflыҡ күрһәтһәк, беҙ яһаған хаталар киләсәк быуындарҙың иңенә ауыр йөк булып ятасаҡ.**



**Зәкирйән ӘМИНЕВ, философия фәндәре кандидаты.**

ӘЙТӘГҮР!

# ТЫЙЫРҒАМЫ БАЛАНЫ,

## әллә иркенә ҡуйырғамы?

**?** **Беҙҙең халыҡтың тәрбиә алымдары араһында баланы тыйыу киң ҡулланыла. Ә хәҙер, баланы тыймаҫҡа кәрәк, тигән саҡырыуҙар яңғырай. Тәрбиәлә бындай ҡараштарҙың ҡайһыһы дөрөҫ, тип уйлайһығыҙ?**

**Зилә СӘЛИМЙӘНОВА, педагог:** Тәрбиәлә тыйыу тигән төшөнсәне фәҡәт бер яҡлы ғына ҡарап булмай бит, урыны менән тыяһың, урыны менән тыйыуҙың кәрәкмәүе лә бар. Элек ныҡ тыйғандар, әле улай уҡ тыймаһаң да була, тигән ҡараш та дөрөҫ түгел, заманына ҡарамайынса, хәл-торош һәм шарттарға бәйле хәл ителергә тейеш был мәсьәлә. Һәм, ғөмүмән, бәхәсле был, сөнки уртаҡ ҡалып юҡ. Һәр баланың үҙ холҡо. Ҡайһы берҙәренә ипле генә итеп бер тапҡыр өндәшеү ҙә етә, сөнки ул бала бер уйҙан икенсеһенә тиҙ генә күсеп китә ала. Үҙ уйҙарынан арынып, шунда уҡ әсәһенең әйткәненә ҡолаҡ һала. Икенселәренә тауыш күтәрмәгән хәлдә лә ҡысҡырыбыраҡ өндәшергә кәрәк. Ундайҙарын үҙ уйҙарынан фәҡәт көслөрәк тауыш ҡына айнытып ебәрә ала. Был уның тәрбиәһеҙлегенән, һинең һүҙеңә ҡолаҡ һалмауҙан, һине һанға һуҡмауҙан түгел, ә холҡонан килә. Шуның өсөн уны ҡайта-ҡайта холоҡһоҙлоҡта ғәйепләп битәрләү, әрләү урынына үҙеңә был холоҡҡа күнергә йәки яраҡлашырға кәрәк. Тыйыу-тыймау буйынса ла шул уҡ хәл. Иң башта шуны иҫтә тоторға кәрәк: самаһыҙ битәрләү, тыйыу баланың башын ҡаңғырта. Тыйыу урынына икенсе саралар ҙа ҡулланып була. Әйтәйек, газға теймә, тип тыйыу урынлы. Ә үтеккә теймә, тип тыйыу урынына уны алып ҡына ситкә ултыртырға, йәшерергә мөмкин.Көйһөҙләнгән баланың иғтибарын ситкә йүнәлтергә мөмкин. Бала тәрбиәләүҙең ҡатмарлылығы аҙым һайын, көн һайын осрай. Әммә халҡыбыҙ аҡылы тәрбиә эшендә төп йүнәлеште баланың рухын һындырмауға, күңелен китмәүгә йүнәлткән, сөнки ул үҙенән һуң рухлы нәҫел ҡалдырыуҙы төп маҡсат итеп ҡараған

**Миңзәлә АҪЫЛҒУЖИНА, дүрт бала әсәһе:** Был һорауға бер төрлө генә яуап биреп булмай, әлбиттә, сөнки ул ике яҡлы мәсьәлә. Балаларын тыймаған ғаиләләрҙә булғаныбыҙ, күргәнебеҙ бар: бала атаһын да, әсәһен дә тыңламай, үҙе ни теләй, шуны эшләй. Ул баланың әле баштан шулай булыуына аптырап ҡайтабыҙ, ә ул үҫә төшкәс, ниндәй булыр икән? Бөтөнләй ҡулдан ысҡынасаҡ бит! Әлбиттә, баланы гел генә "башына һуғып", тыҡып тороуҙы ла дөрөҫ тип әйтеп булмай, сама белергә кәрәк. Дөрөҫөрәге, тыйырға кәрәк ерҙә - тыйырға, кәрәкмәгән урында артыҡ тыйып, баланы ирекһеҙләмәүең хәйерле, юғиһә, уның баҫылып, ҡыйыуһыҙ, баҙнатһыҙ һәм хатта ҡурҡаҡ булып ҡалыуы ла бар. Кәрәк урынында баланы иркенә ҡуйып, уға үҙаллылыҡ биреп алыуҙың һис бер ҡурҡынысы юҡ. Беҙҙең үҙебеҙҙе бит атай-әсәйҙәребеҙ тыйып үҫтерҙе. Был беҙҙе фәҡәт тәртипкә, мәҙәнилеккә генә өйрәтте. Өйгә ҡунаҡ килгәндә, мәҫәлән, улар янына сығып ултырыу, өҫтәлгә үрелеү, шаярып йөрөү йәки көйһөҙләнеү кеүек ҡылыҡтар беҙҙең өсөн бөтөнләй ят булды. Үҫә төшкәс, беҙ хатта клубҡа, кино йә тансаға ла һорап ҡына сығып китә инек. Минеңсә, халҡыбыҙ айырыуса ҡыҙ баланы тәрбиәләгәндә тыйыу алымын йыш ҡулланған. Боронғоларҙың "Ҡыҙ баланы ҡырҡ урындан тый", тигән әйтеме лә бар бит хатта. Сөнки улар ҡыҙ балала милләтебеҙ киләсәген күҙаллаған: буласаҡ әсә һәм ир ҡатыны ғына түгел, ә донъя ҡотон, йәшәү йәмен булдырыусылар, милләтебеҙ әсәләре лә улар. Бала ғаиләлә күбеһенсә ата-әсә өлгөһөнә эйәреп үҫә, шуға күрә үҙең ҡылған ғәмәлдәрҙән баланы тыйыуҙың кире һөҙөмтәгә килтереү ихтималын да онотоорға ярамайҙыр. Ата-әсә үҙҙәрен яман ғәҙәттәрҙән, алама ҡылыҡтарҙан тыйып йәшәй икән, балаларына, тимәк, махсус тыйыу ҙа кәрәк булмаясаҡ.

**Ринат ӘБҮБӘКЕРОВ, күп балалы ғаилә башлығы, уҡытыусы:** Тыйыу, тигәндә, минең күҙ алдына башын эйеп, шымтайып ҡына баҫып торған ир бала һынланғандай була, ләкин мин барыбер тыйыуҙы тулыһынса инҡар итеү яғында түгел. Тыйыу алымын баланы ҡурҡытып, кәмһетеп түгел, ә аңлатып, кинәйәләп һәм баланың күңелен яраламай ипле ҡуллана белергә кәрәк. Кемделер, бигерәк тә баланы тыйыр өсөн тыйған кеше – ата-әсәме, уҡытыусымы ул - үҙе бала алдында абруйлы, өлгөлө кеше булырға тейеш, тип уйлайым. Әгәр һин "яҙылмаған" шул талапҡа яуап бирмәйһең икән, баланы тыйырға ниндәй әхләҡи хоҡуғың бар? Икенсенән, тыя барып, баланы ҡыйыуһыҙ, үтә тыңлаусан роботҡа әйләндереүҙән дә һаҡ булырға кәрәк. Совет заманында беҙҙе бит фәҡәт тыңлаусан булырға өйрәттеләр. Отличник, ләкин бер аҙ шаянраҡ, шуҡ һәм үҙ һүҙле балаға ҡарағанда уртаса ғына уҡыған, ләкин тыңлаусан, өнһөҙ баланы өҫтөн күрҙеләр. Ә бит тыңлаусанлыҡ үҙ сиратында баланы ике йөҙләләнергә мәжбүр итә, ялағайлыҡ сифаты "тәрбиәләй". Хәйер, ул заманда тап шундайҙар кәрәк тә ине система өсөн. Тыйыуҙың бит тағы ла "Тыйылған емеш татлы була" тигән яғы ла бар. Тыйыу йыш ҡына кире һөҙөмтә биреүе лә бар, йәғни баланың бер заман тыйылғанды татып ҡарау теләге тыуыуы ихтимал. Шуға күрә, тыйыуҙы ниндәйҙер бер ҡалып, баланың иркен сикләүсе тимер ҡоршау рәүешендә түгел, ә уның тәртибенә дөрөҫ йүнәлеш биреүсе, уны теге йәки был ярамаған ҡылыҡтарҙан аралаусы гуманлы сара итеп файҙаланырға кәрәк, тип уйлайым.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

ФЕКЕРЛӘШӘЙЕК!

**Быйыл баш ҡаланың башҡорт балалары өсөн ойошторолған "Шаяниум" исемле матур, сағыу, күңелле байрамына 11 йыл тулды. Юмор - туған телде пропагандалауҙың елле ҡорал икәненә ошо тиҫтә йыл эсендә үҙебеҙ шаһитбыҙ. Тәүге осорҙараҡ туған телендә саҡ-саҡ һөйләшеп торған ҡала балалары араһында башҡорт телен яҡшы белеү, яҡшы һөйләшеү айырым бер "текәлек" билдәһе булып китте. Шулай итеп, "Шаяниум" форматындағы саралар бәгзе атай-әсәйҙәр, олатай-өләсәйҙәр бирә алмаған тәрбиәне ҡандарына һәм баштарына һеңдереүгә, ысын ҡала башҡортон формалаштырыуға тос өлөшөн индерә башланы. Ә инде мәктәп уҡыусылары араһында үҙ кумирҙары, "ҡанатлы" шаяртыуҙар килеп сығыуы - үҙе үк күңелле бер күренешкә әйләнде.**

# ШАЯРЫУ ҒЫНА ТҮГЕЛ...

## бала күңеленә ғәҙел баһаны ла һеңдереү был

Әлбиттә, ошондай күңелде үҫтереүсе, рухты нығытыусы байрамды ойоштороған кешеләргә тағы бер ихлас рәхмәт әйтке килә. Сәскән орлоҡтарҙың мул уныш биреүе йылдан-йыл уйында ҡатнашыусылар артыуында ла, башҡорт телендәге матур сығыштар кимәлендә лә асыҡ сағылышын таба. Әммә быйылғы конкурс, үкенескә ҡаршы, унда ҡатнашыусы уҡыусылар өсөн байрам кәйефе бирә алманы кеүек. Был репетицияға килгән уҡыусылар, уларҙың етәкселәренең кәйефендә лә, дөйөм мөхиттә лә ныҡ һиҙелде. Әгәр элекке "Шаяниум"дарҙа ҡатнашыусы балалар бер-береһен шатланышып сәләмләнә, үҙ-ара көләшеп, танышып, шаярышып, күҙҙәрҙә сәм менән шатлыҡ осҡондары янһа, был юлы репетициялар ҙа, тамаша үҙе лә шым ғына, моңһоу ғына үтте. Сөнки конкурс йомғаҡтарының ғәҙел үтмәйәсәге, еңеүселәрҙең алдан уҡ билдәләнеүе барыһына ла көн кеүек асыҡ ине...

Әгәр ҙә үҙем һайлап алыу турҙарының береһендә ҡатнашмаһам, бәлки, фекерем ул тиклем ҡәтғи булмаҫ ине. Ошо урында баһалама ағзалары тураһында айырым әйтеп үткем килә. Яҡшы күренәйем, тип, һәр сығышҡа тиерлек "биш" билдәһе ҡуйып ултырған баһалама ағзаларын объектив тип һанап буламы? "Минә, ысынлап та, бар сығыштар ҙа оҡшаны", тип аҡланырға була. Баһалау - тимәк, сағыштыра белеү. Ә сағыштыра белеү һәләте юҡ икән - баһалама комиссияһына үткер күҙләрәк, талапсанырак кешене ултыртырға кәрәк бит. Әммә был ғына ла түгел әле. Баһалама ағзалары араһында балаларын бер үк мәктәпкә йөрөтөүселәр, үҙ-ара дуҫтар, йәштәштәр, хатта элек бер үк отҡорҙар һәм тапҡырҙар командаһында сығыш яһаусы булыусылар ҙа бар. Шуға ла баһалау критерий - фекер күплеге, айырмалығы һәм төрлөлөгө бит.

Уйындағы текстарҙы мөхәррирләүсе кешеләргә айырым иҫкәрмә яһағы килә. Һеҙгә нисек кенә көлкө күренмәһен, әммә "Тимур мутить итэм, ти... - Не прокатит!.." ("Рәссамдар"), "Эй, матур һылыуҡай, хәлдәрең нисек? - ...Ыштаным тишек" ("Кырғаяҡтар") йәки "Любезники-любизар, отвечай за свой базар!" тигән шаяртыуҙарҙы, уҡыусы ҡыҙ баланың "Күкрәгендә - урман, ә ҡаштары - буран, ә үҙең һин - әрмән егете..." ("Кендектәр") тип йырлап тороуын оло сәхнәгә сығарыу апты-ратты. "Бер егеттең ҡыҙҙарҙы клеить итергә клейы бөткән", "Эп-эсвежий аңыылыҡтар", "Во дает!", "Наконец-то байыр инем", "Так-то ул минең мөхәббәтем" тигән шаяртыуҙар ҙа ҡолаҡты ярып килеп керҙе. Рус һүҙен ҡыҫтырһаң, имеш, бик көлкө була...

Финалға кемдәр сыҡты - шулар сыҡты инде, кемгә урындар бирелде - шуларға бирелде инде. Кире тартып алып булмай. Барыһынан да бер баш өҫтөн булған "Башкорттар.ru" Гран-приҙы ғәҙел алды, ә бына шаяртыу кимәле менән дә, сәхнәлә тотоштары менән дә башҡа командаларҙан айырылып торған "Һупайлы дәрүиштәре" ни өсөндөр артҡа шылдырылды... Ә бит балалар барыһын да күрә, тоя. Беҙ, ололар, өндәшмәй ҡалған булабыҙ. Ә беҙ күптән инде көсәйеп барған милләт. Беҙгә өндәшергә генә түгел, яр һалырға ваҡыт. Сөнки башҡорт балалары ҡатнашҡан саралар - ул иң яуаплыһы.

Бер тамсы һыуҙа бөтә океандағы элементтар ҙа бар, тигәндәй, "Шаяниум" конкурсынан сығып, бөгөнгө башҡорт йәмғиәтенең торошо тураһында һүҙ йөрөтөргә булалыр. Бер юлы "Положение"ла яҙылмаған, әммә һәр рухлы башҡорт күңелендә йөрөтөргә тейешле ғәҙел баһаның критерийҙары тураһында һөйләшке килә.

"Шаяниум - 2013" - балаларҙың күңелле байрамына түгел, ә мәктәп директорҙарының амбициялары һәм уларҙың юғарылағы бәйләнештәр бәйгеһенә әйләнде. Бер "Шаяниумда" ғына түгел был хәл. Мәҫәлән, уҡытыусыларҙың төрлө конкурстарында ла осратырға була был ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ күренештәрен. Ошондай ығы-зығыла, иртәгә үк онотоласаҡ Маҡтау ҡағыҙҙары алайым тип йүгерешкәндә, баш ҡалала тырышып-тырмашып йәшәгәнебеҙҙең төп маҡсаты - милли интеллигенцияны тәрбиәләүҙе бөтөнләй онотоп китмәнекме икән? Ун йыл элек тә түгел, хатта биш йыл элек тә түгел, тап хәҙер - башҡорт теленә, башҡорт иленә хәүеф янаған ваҡытта, беҙ иң тәү сиратта бөгөнгө амбицияларҙы ҡәнәғәтләндереү менән түгел, ә киләсәккә ныҡлы нигеҙ һалыу тураһында көн һайын, сәғәт һайын уйларға тейешбеҙ.

Милләтебеҙҙең төп байлығы - ул беҙҙең балалар. "Халыҡ" тигән оло төшөнсә балаларыбыҙ күңелендә иң ғәҙел, ҡурсалай һәм һаҡлай, яҡшылыҡ ҡылғаныңды күрә һәм баһалай алыусы көс менән бәйле булмаһа, тимәк, ул йәшәйештең күбеһе өсөн ғәҙәти "Мин үҙем һәм бар донъя" психологияһын үҙләштерәсәк. "Мин үҙем" психологияһы иртәмеһүңмы "Халыҡ бөгөн бар, иртәгә юҡ" тигән төшөнсәгә әйләнәсәк. Сөнки, халҡым, тип ихлас күңелдән атлығып торғанында, ул күрәләтә ғәҙелһеҙлек менән осраша бит. Тимәк, милләт интеллигенцияһы, милләт лидерҙары уға үҙҙәре үк рух ҡанундары буйынса түгел, ә башҡа ҡанун буйынса йәшәү юлын күрһәтә. Өлгө булырға тейеш шәхестәр бына ултыра бит теҙелешеп - баһалама комиссияһында... Тимәк, тағы тарихтан әҙләргәме беҙгә рухлы, ғәҙел шәхестәрҙе?..

Дон - Кихот яҙмаһы түгел был. Моңһоу уйланыуҙар ғына. Беҙҙең мөхиттә лә төрлө кешеләр бар һәм буласаҡ. Әммә милләт киләсәге - балаларҙы конкурстарға әҙерләгәндә, баһалама комиссияһы ағзаһы булып ултырғанда бала күңеле, рух тураһында онотмайыҡ. Беҙҙең маҡсат бер бит. Һәм минең юғарыла яҙған фекерҙәрем бер "Шаяниум"ға ғына ҡағылмай икәнен дә аңлағанһығыҙҙыр.

**Зөһрә БУРАҠАЕВА.**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тыйғандыр... ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЭШЛЕКЛЕ ЛӘ...

## бер үк ваҡытта һаҡ та булайыҡ

**Хәлим ӘЙҮПОВ, автомәктәп етәксеһе, Өфө ҡалаһы:** Һүҙемде барыбыҙҙы ла борсоған эшһеҙлек темаһынан башлағым килә. Башты эшләтеп ҡараһаң, эшһеҙлектең объектив сәбәптәре, минеңсә, улай уҡ ҡурҡыныс, шаҡ ҡатырлыҡ түгел. Ундай сәбәптәрҙең күҙгә иң бәрелгәне - һаулыҡ насарайыуы, йә, өлкән йәштә булыу арҡаһында, эшкә яллана алмау. Бөгөн башлыса эшһеҙлектән пенсия йәшенә яҡынлаусылар һәм һаулығы буйынса үҙҙәренә оҡшаған эш таба алмаусылар интегә. Был - дәүләтебеҙ бәләһе. Ә ҡалғандар, йәғни был төркөмгә ҡарамаған йәш кешеләр барыбер ҙә эшһеҙ булған өсөн үҙҙәре ғәйеплелер, тип уйлайым: кемдер эсергә ярата һәм шуға ла бер эштән ҡыуылып, икенсеһенә, өсөнсөһөнә күсеп йөрөй; кемдер "елкәһе соҡор" булыуы арҡаһында бер коллективта оҙаҡ эшләй алмай. Шуға күрә, эшһеҙлек проблемаһы, дәүләттән дә бигерәк, үҙебеҙ тарафынан уйлап сығарылған, үҙебеҙ үҫтергән бәлә түгелме икән, тигән шик тә тыуа. Эшһеҙлекте бөтөрөп буламы? Элегерәк, совет осоронда, ул ҙур енәйәт һаналды, бушты-бушҡа ауҙарып йөрөгәндәр булманы. Эскегә бирелгәндәрҙе лә дауалау-хеҙмәт профилакторийҙарында мәжбүри "ял иттереп" алалар ине. Әммә был да мәсьәләне хәл итеүҙең иң аҡтыҡҡы юлы түгелдер әле. Юлдар бихисап. Яйын тапҡаны - Себергә барып булһа ла таба аҡсаны. Ауылда мал көтөп, баҡса үҫтереп, бынамын тигән итеп донъя көткән ғаиләләребеҙ ҙә күп. Үҙебеҙҙе ҡайғыртып, аңлы рәүештә эшләргә өйрәнгәндә, эшһеҙҙәр бөтөнләй булмаҫ ине. Әлбиттә, халыҡтың мәшғүллегенә дәүләт тә үҙенең өлөшөн индерергә бурыслы.

Бөгөнгө "Зыялылар майҙаны"нда һүҙ барасаҡ тағы бер мәсьәлә - юл һәләкәттәре йышайыуы. Автомәктәп хеҙмәткәре булараҡ, юл хәрәкәте хәүефһеҙлегенә аҙмы-күпме тәьҫир итә алырлыҡ белемем булғанға күрә, йыш ҡына дөрөҫ хәрәкәт итеү, кешеләрҙең ғүмерен һаҡлау тураһында аңлатыуҙар алып барырға тырышам. Иғтибарлы уҡыусы мине Башҡортостан "Юлдаш" телеканалында һәм радиола ҡатнашҡан тапшырыуҙар буйынса таныр, бәлки. Урамда юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоусыларҙы күрһәм, уларҙы киҫәтеүҙе, белеп еткермәгәндәргә ҡайһы бер ҡағиҙәләрҙе аңлатып китеүҙе үҙемдең бурысым тип ҡабул иткәнмен күптән. Әммә водителдәр араһында әйткән һүҙгә ҡолаҡ һалмай, һүҙ көрәштереүселәр ҙә осрай. Күрәһең, ЮХХДИ хеҙмәткәренән башҡаларҙың һүҙенә ҡолаҡ һалмаһаң да була, тип уйлай улар. Мәҫәлән, ҡайһы бер ханымдар балаларын мәктәпкә машинала килтерә һәм, туҡтар урын булмау сәбәпле, автомобилдәрен йәйәүлеләр үтә торған махсус билдә менән аныҡланған юлға килтереп ҡуя. Һәҙәмтәлә, башҡа кешеләр, мәктәпкә килеүсе балалар ҙа, шундай автомобилдәрҙе урап үтеп, ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйырға мәжбүр. Аңлата башлаһаң, ҡайһы берәүҙәрҙең сит бала ғүмеренә ни тиклем битараф булыуына инанаһың. Минең тоҫмаллауымса, бетә-күрә юл хәрәкәте тәртиптәрен боҙоуҙы булдырмау сараһын тапҡанда, йәғни юлдағы барса халыҡ юл ҡағиҙәләрен аңлы рәүештә боҙмай башлаһа, юл фажиғәләре 20-30 процентҡа тиклем кәмер ине. Мөмкинме был? Был турала һәр кем уйланһа, мөмкин. Тағы ла, яҡындарыбыҙ һәм башҡа кешеләр именлеге, балалар ғүмере өсөн борсолоу, уйланыу күңелебеҙҙә һәр саҡ булырға тейеш.

**Илгизәр БУЛАТОВ яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЯҘМЫШЫҢ... буйыңа ла бәйлеме?

■ Һәр ваҡыт нимәнелер онотаһығыҙмы? Улай булһа, һеҙгә розмарин кәрәк. Нортумбрия университеты психологтары розмариндың баш мейеһе эшмәкәрлегенә ыңғай тәьҫирен асыҡлаған. Һынауҙарҙа 66 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың яртыһы розмарин еҫе аңҡып торған бүлмәгә, ҡалғандарын ябай бүлмәгә урынлаштырғандар. Бөтөн ҡатнашыусылар ҙа хәтер үҫенсәлектәрен өйрәнеүсе бер нисә тест яҙған. Һөҙөмтәлә, розмарин еҫен еҫкәүселәр тест һорауҙарын 60-75 процентҡа яҡшыраҡ үтәгән. Ғалимдар аңлатыуынса, розмаринда 1,8-цинеол тип аталған берләшмә бар. Ул хәтер нигеҙендә ятҡан химик системаға тәьҫир итә. Мәсьәләләрҙе тиҙерәк сискән кешеләрҙең ҡанында тап ошо берләшмәнең концентрацияһы күберәк булыуы асыҡланған да инде.

■ Йоҡоһоҙлоҡ менән нисек көрәшергә белмәйһегеҙме? Ғалимдар әйтеүенсә, тиҙ генә йоҡлап китергә бесәй үләне төнәтмәһе (настойка валерианы) ярҙам итәсәк. Бының өсөн уны эсергә түгел, ә еҫкәргә кәрәк. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был осраҡта ул егерме тапҡырға тиҙерәк һәм яҡшыраҡ тәьҫир итә. Шулай итеп, әгәр ҙә йоҡлай алмайынса йонсоһағыҙ, йоҡларға ятыр алдынан бесәй үләне төнәтмәһе еҫкәгеҙ. Тын алыу тәрән түгел, әммә яй булһын. Артыҡ тырышып ташларға ла ярамай, был осраҡта башығыҙ ауыртасаҡ. Бындай терапияны 4 айға тиклем дауам итергә була. Бер айҙан һуң үҙгәреҙҙе ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр тоясаҡһығыҙ, йоҡоғоҙ ғына түгел, йөрәк эшмәкәрлеге яҡшырасаҡ, ҡан баҫымы яйланасаҡ.

■ Ҡыҙҙырылған майҙа әҙерләнгән ризыҡтарҙы, шул иҫәптән, фри картуфы, чипсы, ҡыҙҙырылған тауыҡты йыш ашау һәр кешенең, бигерәк тә ир-егеттәрҙең сәләмәтлегенә кире йоғонто яһай. The Prostate баҫмаһы яҙыуынса, аҙнаһына бер тапҡыр ғына бындай аҙыҡ ашаған ир-егеттәрҙә простата яман шеше хәүефе 30-37 процентҡа күтәрелә. Ғалимдар әйтеүенсә, ҡайнаған майҙа әҙерләнгән ризыҡ ашау һәм яман шеш барлыҡҡа килеү араһындағы бәйләнеш барлығын белдереүсе был беренсе асыш. Тикшеренеүҙең етәксеһе доктор Джанет Стэнфорд аңлатыуынса, был бәйләнештең көсө майлы ризыҡ ҡулланыуҙың йышлығынан тора.

■ Йәмғиәттә ирҙең буйы ҡатынының ыҡына ҡарағанда бейегерәк булырға тейеш, тигән ҡанун йәшәй. Был айырма күпме булырға тейеш - ғалимдар ошоно асыҡлап ҡараған. Ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәре иҫәпләүенсә, ир-егет яҡынса 20 сантиметрға бейек булырға тейеш. Ә көслө зат өсөн буйҙағы айырма 8 сантиметр булһа, шул еткән. 50 мең кешенән идеаль буй тураһында һорау алыу күрһәтеүенсә, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн иң ҡулайлы буй тип - 173, ирҙәр өсөн 188 сантиметр иҫәпләнә. Статистика күрһәтеүенсә, күпселек парҙарҙа ирҙәр ҡатындарынан бейегерәк - 92,5 процент. 4 процент парҙарҙа ҡатыны бейегерәк, ә 3,5 процент осраҡта ир менән ҡатындың буйы бер тигеҙ. Әйткәндәй, яңыраҡ Гэллапа институты хеҙмәткәрҙәре асыҡлауынса, кешенең буйынан уның яҙмышы нисек булыры ла билдәләнә. Уртаса буйҙан (ирҙәр өсөн - 177, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн 162,6 сантиметрҙан юғарыраҡ) бейегерәк булыусылар үҙҙәрен күпкә бәхетле, уңышлы һәм күңеллерәк тоя.

ШАҢДАУ

**Өфөгә ингән ерҙә, Салауат Юлаев проспекты менән Зәки Вәлиди урамы киҫешкән урында бөйөк батырыбыҙ Салауат Юлаевҡа һәйкәл-стела ҡуйылыу мөмкинлеге хаҡындағы хәбәр йәмәғәтселекте шатландырҙы, әлбиттә. Ләкин унда ҡуйылыуға дәғүә итеүсе һәйкәл эскизы ҙур бәхәс тыуҙырҙы. Беҙҙең гәзит биттәрендә лә ҡайһы бер уҡыусыларыбыҙ был проектҡа ҡаршы ҡырҡа ҡарашын белдерҙе. Улар башҡорт батырына һәйкәлдең короған, япраҡһыҙ ағас һөлдәһе рәүешендә булыуын бөйөк шәхесебеҙҙе хөрмәт итмәү билдәһе тип баһаланы. Иғтибарығыҙға тағы ике хат тәҡдим итәбеҙ.**



# ҺӘЙКӘЛДӘР КӘРӘК ТӘ УЛ...

**Телевизор аша матур ғына бер йырсы ҡатын-ҡыҙҙың концерты бара ине. Бер йырын ул йылға буйында, йыуан, эре ботаҡлы ҡап-ҡара ҡыу ағас эргәһенә баҫып йырланы. Йөрәгем жыу итеп китте. Үкенескә күрә, был "ҡыу ағас" фоны башҡа йырсыларҙың сығышында ла күренгеләп ҡала. Артистарҙың сығышын төшөрөүселәр тарафынан махсус эшләнәме был, әллә ҡыу ағас - ул үлем, уңышһыҙлыҡ, еңелеү икәне баштарына барып етмәйме уларҙың?**

Әле килеп, быуаттар аша халҡыбыҙ күңеленә быуындан-быуынға тапшырылып, йөрәгебеҙгә матур ҙа, батыр ҙа, көслө-ғәйрәтле лә булып инеп урынлашҡан Салауатыбыҙҙың һынын да ҡыу ағасҡа тиңләп ҡуймаҡсылар икән. "Киске Өфө"нөң былтырғы 41-се һанында баҫылғайны баш ҡаланың Салауат проспектына ҡуйырға ниәтләнгән был ҡыу ағас һын. Ул хаҡта уҡығас, Өфөлә йәшәүсе барса башҡорт күтәрелеп сығыр һымаҡ ине. Дүрт ай ваҡыт үтте. Ғафури районынан Ғиндулла Шәйәхмәтов менән Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылынан Йәмних Ҡашҡаровтан башҡа өндәшеүсе юҡ әлегә. Битараф булмағандары өсөн рәхмәт был авторҙарға. Әммә башҡалар нинә өндәшмәй? Яҙыусыларыбыҙ, шағирҙарыбыҙ, театр һәм филармония артистары, институт, колледж, техникум һәм мәктәп уҡытыусылары, директорҙары, ҡала һәм райондарҙа йәшәүселәр һәм ундағы етәкселәребеҙ, һеҙ ҡайҙа, тип һөрән һалғым килә хатта. Нинә башҡа гәзит-журналдар яҙмай был хаҡта?

Әлбиттә, һәйкәлдәр кәрәк. Салауат Юлаев һымаҡ шәхестәргә арналғандары баш ҡаланың һәр районында ултыртылһа ла артыҡ түгел, сөнки унда миллиондан ашыу кеше йәшәй, килеп-китеүселәр ҙә күп. Салауатҡа һәйкәл эшләүселәр киләсәктә лә булыр. Улар башҡорт халҡының тарихын өйрәнгән, ныҡлы белгән, үҙен дә, илен дә, гөрөф-ғәҙәттәрен дә хөрмәт иткән, аҡыллы, ғалим кеше булырға тейеш, минеңсә. Ана, Тавасиев һымаҡ. Батырыбыҙҙың һәйкәле уныҡынан артыҡ булһа - булһын, ләкин кәм булмаһын. Салауатыбыҙҙың башы короған ағасҡа уралып, ергә һеңеп ултырырға тейеш түгел! Ғ.Шәйәхмәтов менән Й.Ҡашҡаровтарҙың фекерҙәре менән тулыһынса килешәм. Милли батырыбыҙҙың һәйкәле мотлаҡ ат менән бергә булырға тейеш. Башҡорт халҡының ярлыһының да эш аты, менге аты, сапҡын аты, йөк аты һәм башҡалары булған. Аттарҙың да төрлөһө бар. Һәйкәл эшенә ҡалһа, Салауатыбыҙҙың аты ауырлыҙан һуң йонсоған, аяҡтарын йыйып ала алмаған ҡорсаңғы тайға оҡшап тормаһын! Ундай бер "Аҡбуҙат"ыбыҙ бар инде беҙҙең...

Юғары белемем дә, маҡтаулы исемдәрем дә юҡ. Ғүмерем буйы бәләкәстәр менән генә эшләүсе ябай ауыл уҡытыусыһымын. Ҡулыма ҡағыҙ-ҡәләм тотоп, урам буйлап сығып китерҙәй булып ултырам, хәлемдән генә килмәй. Хәленән килгәндәргә өндәшәм: битараф булмағыҙсы әле!

**Мәүлетбикә МОРАТОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**




# ФЕКЕР ИШЕТКЕ КИЛГӘЙНЕ...



**Гәзитебеҙҙә Салауат һәйкәле тураһында эскиз төшөрөлгән бер мәҡәлә һәм ул мәҡәләгә ҡағылышлы ике авторҙың фекере баҫылды. Мин кемдәр нимә яҙыр был яңылыҡ тураһында, тип бик оҙаҡ көттөм, көтөп ала алманым.**

Мин үҙем скульптор һөнәре буйынса белем алдым. Скульптор һөнәре ике төргә бүленә. Беренсеһе - монументаль скульптура, ә икенсеһе - бәләкәй һындар скульптураһы. Мин ана шул бәләкәй һындар скульптураһы менән шөғөлләндем. Шуға ла әлеге Өфөбеҙҙең Салауат проспектына ҡуйылырға тейешле һын эскизы буйынса монументалистарҙың фекерен бик тә ишетке килгәйне.

Күптәр был эскизды етди ҡабул итмәгәндер (сыймаҡланған, һыҙғыланған, үҙешмәкәр рәссам кимәлендәге эш). Тик ни өсөн ябай гәзит уҡыусылар хөкөмөнә сығарылды һуң ул? Был мөһим эште Рәссамдар союзы башҡарырға тейеш тәбаһа. Конкурс иғлан итилергә, унда теләге булған һәр скульптор ҡатнашып, профессиональ баһалама комиссияны аша үтергә тейеш. Юҡһа, итексе бәлеш бешерә, ә ашнаҡсы итек тегә, тигәндәй йәшәйеш китте. Мәҫәлән, бер менеджер - А. Сердюков оборона министры булып эшләп, биш йылға яҡын ваҡыт эсендә бөтә армияны селпәрәмә килтерә яҙҙы. Уның "эшмәкәрлегенән" илебеҙ күргән зыянды һынап сығарырлыҡ та түгел, тиҙәр...

Әйткәндәй, донъяны, ижадты ҡабул итеү ҙә төрлө бит халыҡта. "Киске Өфө" гәзитендә сығыш яһаусы Йәмних Ҡашҡаровтың Өфөбеҙҙең Ағиҙел ярында ҡуйылған һәйкәлде (авторы Сосланбәк Тавасиев) "ҡаянан осорға тора" тип ҡабул итеүе күптәр өсөн яңылыҡтыр. Ә бит ул тәҡдим иткән "атын етәкләгән Салауат"ты ла атынан төшкән яуыр тип фекер йөрөтөүсе табылыр. Өфөнөң "Искра" кинотеатры алдындағы яланғас ҡурай уйнаусы малайға ҡарап та күптәр: "Курайсыны бөтөнләй сисендергәндәр", -тип әйтеп үтәләр бит.

Ә Сосланбәк Тавасиев Салауат Юлаевҡа арналған һәйкәленең эскизын (был эскиз М. Нестеров исемендәге музейҙа тора) Рәссамдар союзы ҡабул иткәндән һуң 25 йыл үткәс кенә әлеге урынына ҡуйҙырыуға өлгәшә алған. Монумент - ул скульптор һәм архитекторҙың берлектәге ижады. Архитекторҙың проекты буйынса, монумент ярға уҡ барып текәлергә, һәйкәл алдындағы майҙанда спорт комплекстары төҙөлөргә тейеш булған. Был турала ул ваҡыттағы партия өлкә комитетының мәҙәниәт бүлеген етәкләүсе Клара Ғәбдрахман ҡыҙы Төхвәтуллина бер тапшырыуҙа һөйләгәйне. Һәр ваҡыттағыса, "аҡса юҡ" тип, аҙаҡ архитекторҙың проектын үҙгәрткәндәр. Ләкин Салауат Юлаевтың һәйкәле, яр ситенә үк барып туҡтаһа ла, мөһәбәт булып ҡала, халҡын ирекҡә әйҙәп, алыҫтарҙан күренеп тора. Баш ҡалабыҙҙан сығып китһәк, оҙатып ҡала, ҡайтһаҡ, иң беренсе булып ҡаршы ала ул. 1967 йылда Салауат Юлаевҡа арналған был һәйкәл асылғас, башҡорт шағирҙары илһамланып шиғырҙар яҙғайны. Рәшит Шәкүрҙең "Бөйөк һыбай" тип аталған шиғырындағы ошо юлдар һәр саҡ иҫтә:

*Мәңгелеккә илдән һөргәйнеләр,*
*Мәңгелеккә ҡайтты Салауат...*

Салауатҡа ҡуйылған һәр һәйкәл бына шундай шиғырҙар тыуҙырырлыҡ булырға тейеш.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ҠАРАШ ИҪКЕРГӘН, ИМЕШ...

**Ошо көндәрҙә редакцияға һәйкәл-стела эскизының авторы Әмир Сафин килде. Әмир Зөфәр улы тыумышы менән Татарстандан. Ҡаҙан химик-технологик институтын тамамлаған. Өфөгә юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң эшкә килгән. Оҙаҡ йылдан "Синтезспирт" заводында эшләгән. 60-сы йылдарҙа ике йыл Англияла, 80-се йылдарҙа өс йыл Кубала нефть эшкәртеүсе заводтар төҙөүҙә ҡатнашҡан. Сәнғәт менән ҡыҙыҡһыныуы бала сағынан килә. Атаһы балта оҫтаһы була. Пенсияға сыҡҡас, Әмир Сафин үҙе ағастан төрлө биҙәүҙәр, өй кәрәк-яраҡтары эшләү менән шөғөлләнә башлай. Шул уҡ ваҡытта баш ҡаланы төҙөкләндереү, эстетик күренешен яҡшыртыу өсөн дә бер нисә проект тәҡдим итә. Әмир Сафин Салауат Юлаевҡа һәйкәл-стела эскизын тәнҡитләгән гәзит уҡыусыларыбыҙға ошондайыраҡ яуап һуҙҙәрен еткерҙе:**

"Һеҙҙең уҡыусыларығыҙҙың минең эскизыма ҡаршы сығыуына үпкәләмәйем, әлбиттә, ләкин улар һаман быуат ярым элек актуаль булған төшөнсәләр менән йәшәй, тип уйлайым. Ҡарашымды раҫлар өсөн түбәндәге дәлилдәр килтерәм.

Улар, мәҫәлән, был һәйкәлдә лә Салауат Юлаев атҡа атландырылырға тейеш, тип күрә. Мин быны мөмкин булмаған эш, тип әйтер инем. Һуҙҙәремде донъя тарихындағы меңәрләгән миҫалдар иҫбатлай. Мин тәҡдим иткән стеланы Тавасиевтың һәйкәленә алмаш итеп түгел, ә үҙгәрә барған хәҙерге заманда уға өҫтәмә кеүек кенә ҡабул итергә кәрәк. Сәнғәттә "стилләштереү" һәм "аллегория" төшөнсәләрен ҡулланыу - ғәҙәти алым. Йәмғиәт ошоға тиклем ҡаҙанған ҡиммәттәргә генә таянып ҡала алмай, ул үҙгәрергә тейеш, юғиһә, ул юҡҡа сығасаҡ.

Сығыш яһаусыларҙың минең эскизды "Короған ағас" тип ҡабул итеүе дөрөҫлөккә тап килмәй. Күптәр стеланың, киреһенсә, елдәргә ҡаршы тора алырҙай бик мәғрүр, ныҡ ағасҡа оҡшауын билдәләп үтте.

Бәлки, шундай кире ҡараш Башҡортостанда Салауат Юлаевҡа, башҡа шәхестәргә арналған һәйкәлдәрҙең әҙ булыуына килтергәндер. Әйткәндәй, минең тарафтан тәҡдим ителгән стела-һәйкәлдең ике авторы бар - авторҙашым профессиональ рәссам Даян Ғәйнетдин улы Тувалев".

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Хәҡиҡәт бәхәстә тыуа, әлбиттә. Ләкин беҙҙең уҡыусыларыбыҙ араһында барыбер ҙә был стела эскизын хуплаусыларҙың табылыуы иқшетелмәне. Тимәк, башҡорт кешеһе үҙенең батырын барыбер ҙә ҡыу ағас итеп һынландырыуҙы ҡабул итмәй. Быны замандан артта ҡалғанлыҡ тип түгел, ә башҡорт кешеһенең рухиәт, сәнғәт, йәшәйеш, матурлыҡ, тәбиғәт, заман тураһындағы ҡарашының үҙенсәлеге итеп баһаларға кәрәк.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



## УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК КАРТЛАС

### Мин күрмәгән өлкән дуҫым

Уҙған быуаттың 90-сы йылдарының беренсе яртыһында этнопедагогика буйынса кандидатлыҡ диссертацияһы өҫтөндә эшләй башланым. Тикшеренеүҙәрем менән педагогика фәндәре докторы, профессор Камил Шәйехмырҙа улы Әхиәров етәкселек итте. Уның оҫта етәкселеге һөҙөмтәһендә диссертациямды өс йылда тамамлап, уны яҡлауға әҙерлек эштәре башланым. Шул йылдарҙа билдәле татар ғалимы Замил Ғәзиз улы Ниғмәтов һәм украин этнопедагогы Мирослав Стельмахович менән таныштым. Замил Ғәзиз улы яҡлау барышында төп оппонентым булып сығыш яһаны. Ә украин ғалимы диссертациямдың авторефератына үҙенең ҡарашын яҙып ебәрҙе. Мирослав Стельмахович Ивано-Франковск ҡалаһында йәшәй һәм, яңылышмаһам, урындағы педагогия институтында профессор булып эшләй ине. Кандидатлыҡ диссертацияһын уңышлы яҡлағандан һуң беҙ уның менән хат алыштыҡ, этнопедагогика буйынса китаптарыбыҙ һәм фекерҙәребеҙ менән алмаштыҡ.

Докторлыҡ диссертациямдың авторефераттарын ебәреү ваҡыты еткәс, уның бер данаһын Мирослав Стельмаховичка һалдым. Алыҫтағы Ивано-Франковскиҙан яуап алырыма ныҡлы инандым. Яуап хаты Башҡорт дәүләт университеты адресына килергә тейеш ине. Шуға күрә ун көндән һуң канцелярияға көн дә инеп йөрөнөм. Әммә яуап булманы. Яҡлау көнөнә бер аҙна ваҡыт ҡалды - яуап һаман юҡ. Мин, автореферат адресатҡа барып етмәгәндер, тип уйлап, канцелярияға инеүҙемде туҡтаттым. Яҡлауға өс көн ҡалғас, ниңәлер, унда тағы инеп сығырға булдым. Кәрәкле "оя"ла етемһерәп кенә бөтәрләнгән, мөйөштәре туҙған конверт ята. Алып ҡарағас, ҡапыл ғына бер нәмә лә аңламай торҙом: барлыҡ адрестар минең ҡул менән тултырылған. Был Ивано-Франковскиға ебәргән хатым ине. Ғүмеремдә үҙемдең хатым үҙемә кире ҡайтҡаны булмағас, аптырап киттем. Шунда ғына конверттың өҫкө һул яҡ мөйөшөнә йәбештерелгән ҡағыҙға иғтибар иттем. Унда ике генә һүҙ яҙылғайны: "Адресат вафат".

Мирослав Стельмаховичтың образы бөгөн дә минең йөрәгемдә һаҡлана. Мин уның тауышы ниндәй булыуын да, нисек һөйләшкәнен дә белмәйем. Тормошонда бәхетле булғанмы һәм ни өсөн был донъяны бик иртә ҡалдырып киткән? Әйтеүе ауыр. Әммә китаптарының, мәҡәләләренең, бигерәк тә хаттарының йөкмәткеһе уның изге, һөйкөмлө, кешелекле булыуы хаҡында һығымта яһарға мөмкинлек бирә. Шуныһы йәл, шундай кеше Ерҙә үҙенең "уҡыусын" бик иртә тамамлап, беҙҙе ҡалдырып китте. Бик үкенесле.

### Үлем ҡойма ямғырҙа һөжүм итә

Докторлыҡ диссертациямды яҡлаған ваҡытта Виктор Николаевич һүҙ алды һәм сығышының һуңында бар гәм алдында: "Самат Әбдрәхимович, һеҙҙең тарафтан шундай тикшеренеү объекты һайланған, ҡайһы бер ваҡыт ролдәрегеҙ менән алмашаһығыҙ: үлем һеҙҙе өйрәнә башлай. Шуға күрә, диссертациягыҙҙы яҡлауҙан һуң был теманан ситләшеп, икенсе философик проблемаларҙы тикшерергә кәңәш итәм", - тине. Мин был кәңәште етди аңлап ҡабул иттем һәм бер йыл самаһы был мәсьәлә менән ҡыҙыҡһынманым. Әммә миндә үлем менән бәйле күренештәргә һәм ваҡиғаларға ҡарата һиҙгерлек ҡалды. Гәзиттә мәҡәләләр уҡып йәки кешеләрҙең үлеменә килтергән ваҡиғалар тураһында тыңлап, мин үлем ситләтеп кенә үҙенең ниәттәре хаҡында иҫкәрткән мәлдәрҙе тотоп ала башланым. Ләкин кешеләр үлемдең шыбырлауына иғтибарһыҙ ине һәм нимә булырға тейеш, шул тормошҡа ашып торҙо. Үлемдең кеше менән шаярыуының, уйнауының беренсе һәм төп билдәһе ниндәйҙер ваҡиғаның ҡапыл ғына билдәләнгән ваҡыт арауығына һыймауында сағылыш таба. Нигеҙҙә, кеше йәки кешеләр төркөмө ҡайҙалыр һуңлай. Билдәләнгән йәки тәғәйенләнгән ваҡыттың - дәрестәр башланыуы, ҡайҙалыр ҡуҙғалыу һ.б. - ҡайһы яҡҡа булһа ла күсеүенә иғтибар итергә кәрәк. Бик йыш шулай ҙа була: яҡын кешеләреңдән кемдер үлемгә "ишек аса", әммә был мәжбүри аралашыу тере ҡала, ә бер ниндәй шиге лә булмаған кеше һәләк була.

Был серле хәл тормош иптәшем Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы халыҡ мәғарифы министры булып эшләгән ваҡытта булды. Кисен барыһы ла тыныс ине. Иртән ул Асҡын районына юлланырға, ә мин өйҙә ҡалырға тейеш инем. Район һабантуйында Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы республика Хөкүмәте вәкиле булараҡ ҡатнашырға тейеш. Ә мин байрамда ҡатнашырға теләмәнем, сөнки күңел асыу сараларына һалҡынмын, кеше Ергә күңел асыу өсөн түгел, башҡа, юғарыраҡ маҡсаттар өсөн килә икәнлегенә инанғанмын.

Иртән, ғәҙәттәгесә, биштә торҙом. Ямғыр булыуға ҡарамаҫтан, йүгереп килдем. Был ваҡытҡа инде үҙемдең теләһә ниндәй көн торошонда ла, үҙенде нисек хис итеүеңә ҡарамаҫтан, мотлаҡ иртән йүгерергә һәм һыу менән ҡойоноуҙың мотлаҡ булыу принцибына тайпылышһыҙ буйһона инем. Хатта вегетарианлыҡтың башланғыс этабында ла, көслө сирләгәндә лә урамға сыға инем, сөнки хатта бер тапҡыр ғына булһа ла үҙемдең рухи көсһеҙлөгөмә аҡланыу тапһам, енеләсәгем көн кеүек асыҡ икәнен белдем. Эйе, бик йыш һыу менән ҡойоноуҙы кисектерҙем, сөнки үҙ тәнем менән шундай мәрхәмәтһеҙ булыу минең пландарыма инмәне.

Йүгереп ҡайтҡандан һуң, иртәнге аш әҙерләй башланым. Был ваҡытта ямғыр көсәйҙе һәм бер аҙҙан ҡойма ямғырға әйләнде. Тәҙрәгә иғтибарлабыраҡ ҡараным һәм: миңә лә һабантуйға барырға кәрәк, тигән фекергә килдем. Булмышымдың серле төпкөлөнән борсоулы иҫкәртеү килде: ҡатынына үлем хәүефе янай. Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙын аптыратып, "Волга"ның алғы урынына ултырҙым һәм беҙ Асҡын яғына ҡуҙғалып киттек. Затон районын һәм Бөрө трактын көслә ямғыр аҫтында үттек. Мишкә районына еткәс, ҡапыл күк йөҙө асылды һәм ҡояш килеп сыҡты. Артабан ямғыр булмаҫ, тип уйлап, махсус эшләнгән ял итеү урынына туҡталдыҡ. Һабантуй яланына ваҡытынан алда барғы килмәне. Бер аҙ ял иткәс, ваҡыт запасы менән юлыбыҙҙы артабан дауам иттек.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

116. Теләһә ниндәй һорауға барлыҡ яуаптар күптән билдәле. Нисек халыҡ алдында сығыш яһау ролендә уңыш ҡаҙанырға, нисек итеп тирә-яҡтағылар менән мөнәсәбәттәрҙе көйләргә, нисек сәләмәтерәк булырға йәки хәтерҙе яҡшыртырға - шәхесте үҫтереүҙең барлыҡ аспекттары китаптарҙа ҡаралған. Шуға күрә, ҡеүәтеңдә артабан да үҫтереү өсөн көн һайын уҡырға кәрәк. Әммә беҙҙең мәғлүмәт менән шыплап тултырылған заманда нимә уҡығаныңыҙға талапсан булырға тейешһегеҙ. Маҡсатығыҙға иғтибар туплап, уға өлгәшеүгә нимә ярҙам итә, шул турала ғына уҡығыҙ. Ҡулығыҙға нимә тура килә шуны уҡырға тырышмағыҙ - сиратта мөһимерәк эштәр тора. Иң мөһимдәрен генә һайлап алып, бер ниндәй ҡиммәте булмаған мәғлүмәткә ваҡыт әрәм итмәгеҙ. Һәр иртәне абруйлы гәзит ҡарауҙан башлағыҙ, был һеҙгә донъя яңылыҡтары, көнүҙәк мәсьәләләр хаҡында хәбәрҙар булырға ярҙам итер. Шулай уҡ уҡыу өлкәһенең киң булыу зарурлығы хаҡында ла онотмағыҙ. Мәҫәлән, тарих, эшҡыуарлыҡ, көнсығыш фәлсәфәһе, сәләмәтлек хаҡында китаптар зыян итмәҫ. Китапханаға барыу ғәҙәтегеҙгә инһен. Хэмингуэйҙан алып Брэм Стоукерғаса уҡығыҙ. Китапханала "Уңыш" тигән рубриканы ҡарағыҙ һәм ундағы төрлөлөк аптыратыр: барлыҡ ауырлыҡтарға ҡарамайынса, бөйөк булып киткән кешеләр тураһындағы илһамландырыусы әҫәрҙәр; физик, рухи һәм аҡыл йәһәтенән үҫеш стратегиялары; һәр ҡайһыбыҙҙа йәшәгән уңышҡа сикһеҙ ынтылыш хаҡындағы китаптар. Уларҙан мөмкин тиклем күберәкте алығыҙ. Ундай китаптарығыҙ һәр ваҡыт ҡул аҫтында булһын һәм уларҙы даими: эшкә барғанда автобуста булһынмы, йоҡлар алдынан булһынмы - уҡығыҙ. Улар һеҙҙе дәртләндереп, илһамландырып торһон.

117. Иртәнге ашты ашағанда кем менән булһа ла осрашыуҙы ғәҙәт итеп алығыҙ. Көнөгөҙ тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, дуҫығыҙ йәки бизнес буйынса партнерығыҙ менән иртәнге аш ейеү эшлекле көндең башы булып тора һәм кәрәкле осрашыуҙар булдырырға мөмкинлек бирә.

118. Бассейнға йөрөү яҡшы. Сөнки ул эшкә генә күмелеүҙән азат итеп, күңекмә яһау мөмкинлеге бирә. Оҙайлы, емешле ауыр эш көнөнән һуң һыу инеү кешене дәртләндерел ебәрә. Был процедуранан һуң үҙегеҙҙе яҡшы тойорһоғоҙ һәм бала кеүек йоҡларһығыҙ.

119. "Камиллыҡ - күнекмәләр һәм ғәҙәттәр ярҙамында өлгәшелгән сәнғәт ул. Беҙ камиллыҡ башланғысы һалынған өсөн дөрөҫ эшләйбеҙ тип уйлайбыҙ, киреһенсә, дөрөҫ эшләгән өсөн камиллыҡҡа өлгәшәбеҙ. Йәғни камиллыҡ - ул эшмәкәрлек түгел, ул - ғәҙәт" (Аристотель).

120. "Бөгөнгө - кисәге көндөң уҡыусыһы" (Бенджамин Франклин).

121. Ике юлдан һәр саҡ тәүәккәллек һәм ҡыйыулыҡ талап иткән беренһен һайлағыҙ. Бик йыш баһаланған хәүеф иң киткес һөҙөмтәләр бирә.

**Робин ШАРМА.**

✓ *Мин әле үҙемдең ҡулымдан бөтөн нәмә лә килгән, өлгөрөп еткән сағым тип иҫәпләйем. Элекке кеүек, хис-тойғолар, йәшлек дыуамаллығы өҫтөнлөк итмәй, ә һәр нәмәнең алтын урталығын табырға тырышам.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

## БАР БУЛМЫШЫҢ ЯҘҘАР КЕҮЕК ЯРҺЫУ, ДЫУАМАЛ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**15-се һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Нәҙәкәт. Кәүҙәләнеш. Әбей. Йәмғиәт. Мәхшәр. Бабичева. Сари. Милләтсе. Редактор. Шовинист. Шикәйәт. Тараҡан. Нимб. Йосопов. Рушанна. НЛО. Ҡояш. Илбаҫар. Усаҡ. Ябаға. Кандидат. Тояҡ. Молл. Лепкә. Араҡы. Тәкә. Театр. Нәшә. Фронтовик. Стена. Опто.

**Вертикаль буйынса:** Емеш. Амортизатор. Көндәш. Яла. Әүлиә. Аласуҡ. Әлфә. Кинйә. Лавр. Ҡамыт. Әрнеш. Евфрат. Нәҙерғолов. Булат. Рената. Әпсен. Әкәмәт. Алтын. Осло. Кәләш. Шыйҙа. Тайтояҡ. Кино. Оҙон. Сакля. Чукча. Шәриғәт. Ҡапҡан. Лиана. Айран. Вето. Түрә.

СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫНДА

# ИЛНУР ЛОҠМАНОВ...

## дуҫтарын һағынған

**Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры, йырсы һәм бейеүсе Илнур Лоҡманов үҙенең ижадын яратыусы яҡташтарын Учалы ҡалаһында үтәсәк "Дуҫтарымды һағынғанда..." исемле ижад кисәһенә саҡыра.**

Илнурҙың үҙе әйтеүенсә, был ябай ғына концерт түгел. Һәр кеше тыуған еренән, тупрағынан, ауылынан ҡот-илһам ала, гел уларҙы һағынып йәшәй, сөнки уның был донъяла башҡарған һәр ғәмәле лә тәү башлап аяҡ баҫҡан ерҙән, эскән һыуҙан, атай-әсәйҙән, туғандарҙан башланғыс ала. Шуға ла концерт йәш йырсының үҙе донъяға килгән миҙгелдә - яҙ айында һәм уның тыуған яғында үтәсәк. Был, беренсенән, рәхмәт һәм ихтирам йөҙөнән, икенсенән, яҡташтарын ун йыллыҡ ижади эшмәкәрлегенең һөҙөмтәләре менән таныштырыу уй-теләге менән эшләнә. "Дуҫтарымды һағынғанда" тип аталған концертта БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Нурия Абдуллина, БР-ҙың атҡаҙанған артистары Резеда Әминева менән Фәрүәз Урманшин, Динар Дәүләтбаев, театрҙың йәш йырсы-актерҙары Радмир Абдуллин менән Ләйсән Миңлеғәлиева ҡатнаша.

"Актер һәр ваҡыт эҙләнеү юлында булырға, камиллашырға, үҙен төрләсә һынап ҡарарға тейеш. Актерлыҡ һөнәрендә төрлө осорҙар була, мин әле үҙемдең ҡулымдан бөтөн нәмә лә килгән, өлгөрөп еткән сағым тип иҫәпләйем. Элекке кеүек, хис-тойғолар, йәшлек дыуамаллығы өҫтөнлөк итмәй, ә һәр нәмәнең алтын урталығын табырға тырышам. Холҡом буйынса сәмле, етеҙ, тик тормаҫ кешемен, уларға өҫтәп, хәҙер инде сыҙамлылыҡ, эске сабырлыҡ - йөрәк, күңел тыныслығы барлыҡҡа килде. Бөгөнгө театрҙы йыр-бейеүҙән айырып ҡарап булмай, актерға йырларға ла, бейергә лә тура килә. Шуға ла минең өсөн йыр менән бейеү актерлыҡ һөнәрем менән бер рәттән, шөғөлдәрем һәм мин уларҙы ихлас, яратып башҡарам", - ти актер һәм был театрлаштырылған тамашала үҙенең тормошонда булған ваҡиғаларҙың барыһын да - әсеһен дә, сөсөһөн дә, ҡыҙыҡлы хәлдәрҙе лә, йән әрнеүҙәрен дә күрһәтергә йыйына.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Илнур Лоҡманов үҙенең ижад байрамы менән уртаҡлашырға саҡыра. Театрлаштырылған тамаша бер генә көн - 27 апрелдә Учалы филармонияһында үтәсәк. Кисә 19 сәғәттә башлана.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ӘЙҘӘГЕҘ, ҺЫНАУҘАРҒА!

**Республика башҡорт лицей-интернаты 5-се һәм 6-сы класс уҡыусылары араһында "ОРБИТА" Республика полиолимпиадаһы үткәрә. Олимпиада 28 апрелдә 11 сәғәттә түбәндәге адрестар буйынса үтәсәк:**

1. Өфө ҡалаһы, Республика башҡорт лицей-интернаты
2. Баймаҡ ҡалаһы, Башҡорт лицей-интернаты
3. Сибай ҡалаһы, Сибай гимназия-интернаты
4. Белорет ҡалаһы, 22-се башҡорт гимназияһы
5. Дәүләкән ҡалаһы, лицей-интернат
6. Дүртөйлө ҡалаһы, Н. Нәжми исемендәге башҡорт гимназияһы
7. Октябрьский ҡалаһы, 4-се башҡорт гимназияһы
8. Учалы ҡалаһы, 12-се башҡорт гимназияһы
9. Инйәр ауылы, 2-се мәктәп
10. Аҡъяр ауылы, 2-се мәктәп
11. Асҡар ауылы, Т. Кусимов исемендәге гимназия
12. Иҫәнғол ауылы, башҡорт гимназия-интернаты
13. Малаяҙ ауылы, башҡорт гимназияһы
14. Мәсәғүт ауылы, Республика лицей-интернаты
15. Мораҡ ауылы, башҡорт гимназияһы
16. Иҫке-Собханғол ауылы, урта мәктәп
17. Йылайыр ауылы, Ш. Бабич исемендәге башҡорт гимназияһы

**Полиолимпиада түбәндәге фәндәр буйынса үткәрелә:**
1. Математика һәм логика
2. Рус теле, башҡорт теле
3. Тәбиғи фәндәр

Полиолимпиада еңеүселәре һәм призерҙары БР Мәғариф министрлығы дипломы һәм ҡиммәтле бүләктәр менән бүләкләнә. Төп бүләк - планшет компьютеры.

Үҙегеҙ менән тыуыу тураһында таныҡлыҡ һәм яҙыу кәрәк-яраҡтары алып килергә онотмағыҙ.

Белешмә өсөн телефон: **(347) 242-18-32**.
Беҙҙең сайт: **www.rbli.ru**
E-mail: **gbourbli@gmail.com**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**25 апрель** Башҡортостандың халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Миңлеәхмәт Ғәйнетдинов "Йыл артынан йылдар ағыла"** тип аталған бенефисына саҡыра. Тамашала Фәрит Бикбулатов, Азат Айытҡолов, Редик Фәсхетдинов, Фәдис Ғәниев, Римма Амангилдина, Айгөл Һағынбаева, Лилиә Биктимерова һәм башҡа сәнғәт оҫталары ҡатнаша.

**Кем алыҡ?** Түбәндәге һорауҙарға дөрөҫ яуап биреп, саҡырыу билеты ота алаһығыҙ.
**1.** Миңлеәхмәт Ғәйнетдинов ҡайҙа тыуған?
**2.** Музыкант ниндәй музыка ҡоралдарында уйнай?

**Телефон: 252-39-99.**

РУХИӘТЕБЕҘ

# ХАЛЫҠ БАЙРАМДАРЫН...

## халыҡ күтәреп алһын!



**БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, БР Милли музейы, БР Милли китапханаһы яңы бәйге иглан итә. 1 апрелдән Башҡортостан Республикаһының мәғрифәтселәре һәм арҙаҡлы мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренең шәжәрәһен төҙөү буйынса иң яҡшы шәжәрә төҙөүгә "Шәжәрә" республика конкурсына ғаризалар ҡабул итеү башланды.**

"Башҡортостан халыҡтары" дәүләт программаһы һәм БР Хөкүмәтенең "Башҡортостан Республикаһында "Шәжәрә байрамы" халыҡ байрамын үткәреү тураһында"ғы ҡарарына ярашлы ойошторолған был бәйге республиканың мәғрифәтселәре һәм мәҙәниәт, сәнғәт эшмәкәрҙәре тарихына ҡыҙыҡһыныу уятыу; ғилми-тикшеренеү, крайҙы өйрәнеү, этнография йүнәлешендәге эшмәкәрлекте әүҙемләштереү, йәш быуынды тикшеренеү һәм ғилми эшкә йәлеп итеү; ғаилә ижады йолаларын үҫтереүгә ярҙам итеү, үҫеп килеүсе быуында зауыҡ, әхлаҡ һәм рух тәрбиәләүҙә уның ролен көсәйтеү; йылъяҙмалар, эпостар, легендалар, милли байрамдар, йола уйындарын һаҡлау маҡсатында ойошторола.

Иң яҡшы шәжәрә төҙөү буйынса республика конкурсы түбәндәге номинациялар буйынса еңеүселәрен билдәләйәсәк:

"Шәжәрәне ентекләп өйрәнгән өсөн";

"Иң тәрән тамырлы шәжәрә өсөн";

"Шәжәрә өйрәнеүҙә һәм төҙөүҙәге ғилми асыш өсөн";

"Шәжәрә төҙөүгә ижади һәм үҙенсәлекле ҡараш өсөн";

"Шәжәрә төҙөүҙә һәм уны күрһәтеүҙә заманса мультимедия программалары ҡулланыу өсөн".

Конкурс 1 апрелдән 15 августа тиклем өс этапта үтә:

I этап - һайлап алыу, район (ҡала) комиссияларына ғариза һәм материалдар тапшырыу (1 апрель - 25 май).

II этап - материалдарҙы Республика эксперт комиссияһы ҡараясаҡ (1 июнь - 30 июль). Ғаризалар һәм материалдар Республика халыҡ ижады үҙәгендә "Иң яҡшы шәжәрә төҙөүгә республика конкурсы ойоштороу комитетына" тигән билдә менән 30 июлгә тиклем ҡабул ителәсәк.

III этап - конкурс еңеүселәре "Шәжәрә байрамы" Республика халыҡ байрамында ҡатнашасаҡ.

Байрам 2013 йылдың 29 сентябрендә Ҡырмыҫҡалы районында үтәсәк. Байрам сиктәрендә түңәрәк ҡорҙар, тарихи урындарға сәйәхәттәр, үҙешмәкәр артистар бәйгеһе, ҡул эштәре күргәҙмәһе, оҫталар йәрминкәһе лә көтөлә.

**Белешмә өсөн телефон: 8 (347) 289-65-50. Яуаплы - Аҡсурина Фәнисә Ғәлләнур ҡыҙы.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# КҮК БӘРҘЕКӘЙ АУЛАП КҮСӘБӘЛӘ,

## Төндәрендә сыраҡ яҡҡанда

**Атҡа, йылҡысылыҡҡа бәйле төшөнсә-атамаларҙы гәзиттә баҫтырыу уҡыусыларыбыҙҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Нимә генә тимәйек, хәҙер ҡурай еләген - малина, ике, өс, дүрт туған ҡустыларҙы, һеңлеләрҙе племянник йә племянница тип әйтеүселәр хатта урта йәштәрҙәге кешеләр араһында ла осрап ҡуя. Онотола барған һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрәйек, уларҙы көндәлек аралашыу лөғәтенә индерәйек, туғандар!**

**Шундай уҡ дәрт-илһам менән үҙебеҙҙең ауылдағы балыҡсылыҡҡа бәйле һүҙҙәрҙе, төшөнсәләрҙе тәҡдим итәм. Бәлки, улар башҡа яҡтарҙа, башҡа ауылдарҙа бөтөнләй башҡаса атап йөрөтөләләр. Шуға күрә, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, был яҙмаларҙы дауам итеүегеҙҙе һорайбыҙ! Ҡыҫҡаһы, әйҙә киттек балыҡҡа!**

**Ыҡтырыу** - ҡармаҡ менән күп итеп балыҡ тотоуҙы беҙҙең яҡта "ыҡтырам" тиҙәр. Ау менән һөҙгәндә был һүҙ ҡулланылмай.

**Аҡ ем ултыртыу** - ике, өс асалы ҡармаҡты ваҡ балыҡ, эре аҡ тиреҫ ҡорто, ваҡ баҡа йә булмаһа малдың көйҙөрөлгән бауыр ите менән емләп, төнгөлөккә һалып ҡуйыуҙы шулай атайҙар. Аҡ ем йәйенгә, сурағайға йә йәшәгән суртанға ултыртыла.

**Шаран һалыу** - йылғаны кирегә ағыҙыр өсөн ағымын ситән үреп йә бүрәнә менән бурап быуып ҡуйыу, ә һыуы кирегә аҡҡан урынға мурҙа һалалар.

**Емләү** - ҡармаҡ һалғанда балыҡтар бер тирәгә йыйылһын өсөн әсегән ҡорот, икмәк һыныҡтары, көрпә уралған сепрәкте йылға ситенә һыуға тығып ҡуялар.

**Балыҡ бүлеү** - балыҡ һөҙөүҙә ҡатнашыусылар өсөн балыҡ бүлеү йолаһы. Бер кеше арты менән боролоп тора, балыҡ бүлеүсе бер балыҡты ҡулына ала ла: "Был балыҡ кемгә?" - тип һорап, уның әйтеүе буйынса тотолған балыҡты бер нисә кешегә бүлеп сыға.

**Ау хаҡы** - балыҡ һөҙгәндә тотолған иң ҙур балыҡ "ау хаҡы" тигән йола буйынса өҫтәмә рәүештә ауҙың хужаһына бирелә һәм был принципҡа бер кем дә ҡаршы төшмәй.

**Мәскәүләү** - таяҡ осона ҡылған үләндән йә башҡа төрлө нәҙек һығылмалы ептән тоҡанлап мәскәү бәйләп ҡуйыла. Балыҡсы ошо ҡоралы менән төбө үтә күренмәле ваҡ йылғалағы йә шишмәләге бәрҙеләрҙе мәскәүләп тота. Был ғәмәл балыҡсынан үтә һаҡлыҡ һәм нәзәкәтлек талап итә.

**Сыраҡҡа төшөү** - төндә туҙҙан сыраҡ, факел йә фонарик яндырып, ваҡ һыулы һылғаға йә шишмәгә балыҡҡа төшөү. Хөсәйен Әхмәтовтың киң билдәле "Тыуған ауылым" йырында беҙҙең яҡта ғына таралған һүҙҙәр бар: Күк бәрҙекәй аулап Күсәбәлә, төндәрендә сыраҡ яҡҡанда...

**Һалдау** - сыраҡҡа төшкәндә иң төп балыҡсылау ҡоралы, һабы ағастан, төп өлөшө тимерҙән яһала, һәнәккә, сәнскескә оҡшаған. Уның менән балыҡты сәнсеп алалар. Һалдау булмағанда сыраҡҡа төшкәндә балыҡты мәскәүләп тә тоталар, төндә балыҡтың ойоған сағында был бигерәк уңайлы.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**
**(Дауамы бар).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯМАНҒА ЙОҒОНМА...

## йоғонһаң - йығылма

Алыҫтағы ауҙы күргәнсе, яҡындағы яуҙы күр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ер аҫты донъяһында бәләкәй генә кешеләр йәшәй. Уларҙың бәләкәйлеге ер аҫты донъяһының тар булыуынан киләлер. Унда һәр ваҡыт йылы, ләкин яҡтылыҡ юҡ. Был кешеләрҙең бер ваҡытта ла ҡоштар тауышын ишеткәне, саф ел иҫкәнен тойғаны юҡ. Улар күктең ниндәй төҫтә, йәш үләндең ниндәй йомшаҡ икәнен дә белмәй. Улар шулай үҙҙәре өйрәнгән, ҡоро, йылы, ваҡ-төйәк бөжәктәр бимазаламаған урында йәшәй бирә. Саф һауа юҡлыҡтан тын алыуы ауырыраҡ булыуы ла, бер төрлө тәмһеҙ ризыҡ менән туҡланыуҙары ла, йылы һәм болғансыҡ һыу эсеүҙәре лә борсомай уларҙы. Шулай йәшәргә өйрәнгәндәр һәм был уңайһыҙлыҡтарҙы шәйләмәйҙәр ҙә. Хәйер, уларҙы уңайһыҙлыҡ тип тә иҫәпләмәй улар, сөнки сағыштырырлыҡ башҡа донъяны белмәйҙәр бит.**

**Ә шулай ҙа уларға тегендә, ер өҫтөндә, икенсе донъя барлығы тураһындағы хәбәрҙәр ишетелеп-ишетелеп ҡала. Ул донъяла саф ел иҫә, йылы ямғырҙар яуа, һулар һауа, эсер һыу көмөштәй саф, унда йәшел үләндәр үҫә, баш осонда зәңгәр күк аҫылынып тора, имеш. Унда йәшәүселәр төрлө тәмле ризыҡ менән туҡлана. Улар бик күңелле һәм бер ҡайғыһыҙ йәшәй, имеш. Бына бер саҡ ер аҫты донъяһы ҡарттары был имеш-мимеште тикшерергә була. Улар ер өҫтөнә разведчик ебәрә. Разведчик ер аҫтынан Себер үҙәгенә, етмәһә, ҡыштың иң һалҡын, елле-буранлы мәлендә килеп сыға. Һәм көскә-көскә тере ҡала. Өшөп-туңып килеп төшә ер аҫты донъяһына һәм күргәндәре тураһында еткерә: ер өҫтөндә кеше йәшәй алырлыҡ түгел, унда ап-аҡ донъя, һыуыҡ, бер ниндәй йәшеллек тә юҡ... Тимәк, ер өҫтөндәге матур донъя тураһында алдайҙар, шулай булғас, нисек йәшәгәнбеҙ, шулай йәшәүҙе дауам итергә кәрәк, тигән ҡарарға килә ҡарттар.**

**Ә шулай ҙа имеш-мимештәр тынмаған. Ҡарттар ер өҫтөнә тағы бер разведчик ебәргән. Быныһы иһә Багам утрауҙарына эләккән. Зәңгәр күкте, икһеҙ-сикһеҙ океанды күреп, иҫе киткән бының. Ағастарҙан өҙөлөп төшкән емештәрҙе ашап, тәмле һыу эсеп, йомшаҡ йәшел үләнгә ятып, туйғансы йоҡлаған. Йылы ямғыр тамсыларына уянып киткән. Ер өҫтөндәге донъяға хайран ҡалып йөрөп, ер аҫты донъяһын онота яҙған. Иҫенә килгәс, күп итеп күстәнәскә еләк-емештәр алып, үҙ донъяһына ҡайтып киткән. Ә ер аҫтында, туңып үлгәндер инде, тип, уның ҡайтыуын көтмәгәндәр ҙә. Разведчик ер өҫтөндә ысынлап та йәшел үлән, зәңгәр күк, саф һауа, ә ризыҡтар ағастарҙан ғына төшөп тора икәнен һөйләп биргән, алып ҡайтҡан күстәнәстәре менән һыйлаған. Аптыраған ер аҫты халҡы. Разведчиктарҙың ҡайһыһына ышанырға белмәгән. Шунан ер өҫтөнә тағы разведчиктарын ебәргәндәр. Берәүҙәр, тәүге разведчик кеүек, ап-аҡ ҡышты һәм һалҡынды ғына күреп ҡайтҡан, икенселәре иһә, тәүгеһе һымаҡ, ерҙең хозур мөйөштәренә эләгеп, ундағы донъяны ожмахҡа тиңләп ҡайтып һөйләгән. Ер аҫты кешеләре шулай төрлө хәбәр ишетеп, икеләнә-икеләнә йәшәүҙе дауам иткән һәм үҙҙәренә шундай һығымта яһаған: ер өҫтөндә йәшәү шулай ҙа ҡурҡыныс һәм хәүефле, ундағы тормош көтөлмәгәнлектәргә бай. Ашаған ризығыбыҙ тәмһеҙ, һулаған һауабыҙ һаҫыҡ, ләкин беҙҙә көтөлмәгәнлектәр юҡ. Иртәгә ни буласағын белеп торабыҙ, ул кисәге көндән айырылмай. Тимәк, ошонда йәшәүҙе дауам итергә кәрәк. Әлбиттә, баяғы имеш-мимештәргә эйәреп, ер аҫты донъяһын ҡалдырып, ер өҫтөнә сығып йәшәүселәр ҙә бар. Улар ҡайһы саҡта ер аҫты донъяһындағы ҡәрҙәштәренә ҡайтып урай, ер өҫтөндәге тормоштоң мөғжизәләре тураһында һөйләй. Алдайҙарҙыр, моғайын..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 12 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5497
Заказ 1536